# ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Халҡым өсөн ....................5

Айға мендем ....................5

Ярһынмаһа күкрәк ....................6

Бер минут ....................6

Ҡитға ....................6

Мандолин ....................7

Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде ....................7

Әйҙә, милләт! ....................8

Үткән көндәр ....................8

Аптыраған минуттарҙа ....................9

Аҡтыҡ зарым ....................10

Әйҙә, күңелем ....................10

Гонаһ, яза ....................10

Юҡ ....................11

Донъяға ....................11

Ауырыуым-һаулығым ....................12

Көтәм ....................12

Шатлыҡ йыры ....................12

Теләймен ....................13

Бәхетем ....................13

Күктә — алла, Ерҙә — иблис... ....................13

Кем өсөн? ....................14

Тын төн ....................14

Йәмле көн ....................14

Матур һындар ....................15

Тешһеҙ ҡыҙ ....................15

Остолар ....................16

Атланым эҙһеҙ ....................16

Ҡыҙыҡ бөттө ....................16

Йәш шағирҙың ҡәбер ташында ....................16

Ҡышҡы юлда ....................17

Хәлебеҙҙән бер күренеш ....................17

Йәшәһен эшселәр! ....17
Афарин ....18
Байҙарға ....19
Буржуй ....19
Мөртәт социалистарға ....20
Көтәләр ....20
Һуғыш ....21
Өҙөләһең дә һыҙылаһың ....21
Минең фәрештәм ....22
Уйҙар уртаһында ....22
Ҡотлау, теләк ....23
Әҡлимәгә ....23
Мин китер саҡта ....24
Зөһрәгә ....24
Шәмсеҡәмәргә ....24
Бағбостанда ....25
Ғәйет көнө ....25
Исемдәр баҡсаһы ....25
Тупраҡ ....31
Список № 9 ....31
Олуғ шатлыҡ ....32
Истиҡбал ....33
Башҡортостан ....34
Байрам ....35
Һау бул, байрам ....35
Ғәскәр маршы ....36
Ғәскәр доғаһы ....36
Дошмандар ....37
Шәфҡәтем ....37
Салауат батыр ....38
Ҡаһарман ....38
Әмир Ҡарамышев ....38
Ҡорбан байрамы мөнәсәбәте менән ....40
Ҡурайҡайға ....41

**Күҙеңде ас** ........................................................42

**Көтмәҫтән** ........................................................43

**Ҡан шәүләләре** ........................................................44

**Йән** ........................................................44

**Беҙ** ........................................................45

**2 Ғинуар көнө** ........................................................45

**Килтер** ........................................................45

**Яҙғы йыр** ........................................................46

**Большевиктар менән килешеү туралы башҡорт халҡына көйлө хитап** .......47

**Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде!**

Башҡорт халҡының ҡаһарман шәхесе, бөйөк милли шағирыбыҙ Шәйехзада Бабичтың тормошо һәм ижады тураһында уйланғанда иң элек уның йәшләй генә ғәйәт ҡатмарлы тормошҡа, ил яҙмышына һәм кеше күңеленә тәрән үтеп инә алыуы, донъяны тойоу һәм аңлау һәләте хайран ҡалдыра.

Шәйехзада Бабичҡа был яҡты донъяларҙа ни бары егерме дүрт йыл, боронғолар иҫәбе буйынса, ике мөсәл ғүмер йәшәп ҡалырға насип була. Ул 1895 йылдың ғинуарында Башҡортостандың хәҙерге Дүртөйлө районы Әсән ауылында тыуа. Башланғыс белемде атаһы Мөхәмәтзакир мәҙрәсәһендә ала. 1910-1911 йылдарҙың йәй айҙарында ҡаҙаҡ далаларында балалар уҡыта. 1911-1916 йылдарҙа Өфөләге атаҡлы «Ғәлиә» мәҙрәсәһенең шәкерте була. 1916 йылда уны тамамлағандан һуң бер йыл Троицк ҡалаһында мәҙрәсәлә эшләй. 1917 йылдың йәйендә Ырымбурга килә һәм бында ойошҡан башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнаша, уның үҙәгендә ҡайнаған төп көстәрҙең береһенә әйләнә. 1918 — 1919 йылдарҙа Шәйехзада Башҡорт хөкүмәте, башҡорт ғәскәре сафында ут-ялҡын һәм ҡанлы ҡыйралыштар эсендә урау-урау юлдар үтә, милләттәштәрен хаҡлы көрәшкә илһамландырыусы үткер шиғырҙар яҙа. 1919 йылдың мартында Йылайырҙа ҡыҙыл ғәскәрҙәр тарафынан вәхшиҙәрсә язалап үлтерелә.

Ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә Шәйехзада Бабич башҡорт халҡының бөйөк шағиры ғына түгел, виртуоз мандолинасы, музыкант, нәфис һүҙ оҫтаһы, фельетонсы, журналист, педагог, фольклорсы һәм дәүләт эшмәкәре булараҡ та танылды. Бәғзе таланттар егерме йәштәренә генә асыла башлаһа, Бабич шул арала тиңдәшһеҙ әҫәрҙәр ижад итеп өлгөрҙө. Милләтебеҙҙең иң һөйөклө шағиры тере сағында уҡ легендаға әйләнде.

Шәйехзада Бабич тигән ғәжәп күренештең төп серен, моғайын, тәбиғәт тарафынан бирелгән бөйөк шиғри һәләт аңлата торғандыр. Донъяға ул шиғри һүҙ батшаһы, шиғри һүҙ тылсымының хужаһы булып тыуған. Ләкин шул уҡ ваҡытта һүҙгә табынған, һүҙгә барлыҡ көсөн биреп тоғро хеҙмәт иткән, һүҙҙең барлыҡ матурлығын асырға ынтылған. Ерҙәге тәғәйенләнешен, яҙмыш тарафынан үҙенә ниндәй бурыс йөкләтелгәнен Шәйехзаданың зирәк зиһене иртә аңлаған. Тарих алдындағы яуаплылығын, халыҡтың ижтимағи тормошондағы урынын һәм вазифаһын шағир яҡшы белгән. Шуға күрә холҡо менән шаян, күңелсәк булһа ла, Бабич ваҡытын мәғәнәһеҙ уйын-көлкөгә сарыф итмәгән. «Мәшһүр көлдөргәс» исемен алған Шәйехзада бер ваҡытта ла арзан һүҙ уйнатыуға юл ҡуймаған. Сәхнәлә лә ил яҙмышын хәстәрләгән. Ғүмерендәге һәр сәғәттең, әҫәрендәге һәр һүҙҙең ҡәҙерен ныҡ белгән шағир. Шуға ҡыҫҡа ғына осор эсендә лә ҙур эштәр атҡарған. Уның йәшәлгән көндәре лә, яҙған шиғри юлдары ла тығыҙ. Бай йөкмәтке, тәрән фекер һалынған шиғырҙары ҡайнар кисерештәр менән һуғарылған.

*Ярһынмаһа күкрәк йәшнәп, күкрәп,*
*Телдәреңдә ялҡын яна алмай.*
*Аһ ормаһаң һыҡрап, тетрәп-тетрәп,*
*Ҡулдарыңдан алтын тама алмай, —*

ун туғыҙ йәшлек Бабичтың һәр һүҙе рифмаланың торған дүрт юллыҡ шиғырында һүҙгә иң юғары талапсанлыҡ сатнатып әйтеп бирелгән. Яҙасаҡ һәр һүҙен шағир йөрәге ялҡынында сыныҡтырған. Шиғри гәүһәрҙәр тыуҙырыр оҫталыҡҡа йәшләй генә эйә булыу, әлбиттә, туҡтауһыҙ рухи камиллашыу юлында ғына мөмкин.

Шағир һәм яугир Шәйехзада Бабич милли шиғриәтебеҙҙә тарихи яңырыш яһаны, әҙәбиәтебеҙҙең халыҡсан рухын, граждандлыҡ үткерлеген өр-яңы юғарылыҡҡа күтәрҙе. Уның әҫәрҙәре аша Башҡортостан образы шиғриәтебеҙҙә үҙ исеме менән тәү башлап кәүҙәләнде, милли дәүләтселегебеҙ символына әйләнде.
Бабич әле лә ватандаштарын берҙәмлеккә саҡырып киләсәккә әйҙәй. Шағирҙың изге ораны бөгөн дә күңелдәрҙе елкендерә — көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде!

Раиул Бикбаев

**Халҡым өсөн**

Ап-аҡ алтын йырҙарымды
Йырламыйм данлыҡ өсөн;
Йырлайым алтын илемсөн,
Үҙ туған халҡым өсөн.

Саф көмөштәй йырҙарымды
Йырламыйм алтын өсөн;
Йырлайым тик саф көмөштәй
Саф йөрәк халҡым өсөн.

Сәскә төҫлө йырҙарымды
Йырламыйм зауҡым өсөн;
Йырлайым тик сәскәләй
Ҡыҙҙарға бай халҡым өсөн.

Дәртле ҡайнар йырҙарымды
Йырламыйм дәртем өсөн;
Йырлайым тик мәңге шат,
Дәртле, көләс халҡым өсөн.

Иламайым мин көндәрем
Һырғаҡ, һыуыҡ һалҡын өсөн;
Илайым тик ярлы, меҫкен,
Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.

Йәш сағым, алтын сағым,
Ялҡын сағым булһын фиҙа
Халҡым алдында минең
Биргән таҙа антым өсөн.

**Айға мендем**

Айға мендем, ай нуры менән ҡойондом, уйнаным,
Күп һөйөндөм, һөйөнөс менән туйындым, туйманым.

Туйманым, айҙан уҙып, мендем ҡояшҡа ашҡынып,
Юҡ, шулай ҙа булманы ташҡын күңелде баҫтырып...

Шул барыштан барышыма, киттем хоҙайҙың ғәрешенә,
Ун һигеҙ мең ғаләме артымда ҡалды барыһы ла.

Ни өсөндөр тапманым күңелем ҡарар ғәрешендә лә,
Көрсөйҙө күрһәм дә хатта тынманым унынһында ла.

Ғәреш — күктәге урын. Дини легенда буйынса йыһан ун һигеҙ мең ғаләмдән, йәғни планетанан, тора.
Көрсөй — тәхет.

**Ярһынмаһа күкрәк**

Ярһынмаһа күкрәк йәшнәп, күкрәп,
Телдәреңдә ялҡын яна алмай.
Аһ ормаһаң һыҡрап, тетрәп-тетрәп,
Ҡулдарыңдан алтын тама алмай.

**Бер минут**

Бер минутта ташты күңелем,бер минутта булды ут,
Берсә янды, берсә туңды,барыһы булды бер минут.

Бер минут бар донъяһын ҡарғап ҡабынды уттарым,
Янды, көйҙө, парса-парса булды меҫкен күкрәгем.

Эйе, янды күкрәгем... Тик, юҡ, ләкин меҫкен түгел,
Был йөрәк утлы йөрәк, үткен күңел, киҫкен күңел.

Ул яна, тик ҡайғырып янмай, яна шатлыҡ менән,
Ул яна был донъяны күрмәк булып аҡлыҡ менән.

Ул яна... Сеү, һипмәгеҙ һыу; эйе, ул янһын әле!
Янған уттар күҙҙәремдән йәш булып тамһын әле!

Там, минең күҙ йәштәрем, там, там, тамып тор мәңгегә,
Ян, минең аҡ күкрәгем, ян, ян, янып тор мәңгегә.

**Ҡитға**

Нәфсе - шайтан, бик яуыз ул, һәр әҙәмде аҙҙыра,
Аҙҙыра торғас, наҙандарҙы юлынан яҙҙыра.

Әммә унан да яуыз бер нәмә бар, ул — эскелек,
Ул халыҡты йорт-еренән һәм диненән яҙҙыра.

Ҡитға — өҙөк.

***

Ризабыҙ, ҡисмәтең беҙгә бүлемле:
Наҙандар маллы, әммә беҙ белемле;
Бөтә тиҙ донъя малы, мәңге тормай,
Белем бөтмәй, юйылмай һәм серемәй.

Ҡисмәтең — өлөшөң

**Мандолин**

Эй үҙәк өҙгөс тауышлы, моңло, зарлы мандолин,
Килсе, моңлансы өҙөп бер,мин дә тыңлап моңланыйм.
Һин минең йән серҙәшем,йән моңдашымһың, мандолин!
Сергә бөткән, моңға бөткән зарлы тауышың йәнгә им.
Шул һинең тауышың ғына тик дәртемә дарман бирә,
Шул бирә һәр нәмәне: шул йән бирә, шул йәм бирә.
Шул миңә уй, шул миңә хис, шул миңәргә аң бирә.
Шул миңә сер шишмәһенән лөәлөә вә мәрйен бирә.
Эй минең күңелемде сафлаусы мөҡәддәс мандолин,
Һине тыңлап, күҙҙәрем саф йәшкә мансып алғылыйм.
Һине тыңлап, һәммә таптан, һәммә керҙән сафланам,
Сафланам да, пакланам да - алла, алла, алла! тим.
Эй сихырлы, серле, илһамлы, ғәжәйеп мандолин!..
Әйҙә һыҙҙыр, әйҙә өҙҙөр, сафланыйм, иманланыйм!

*Лөәлөә* — ынйы.

**Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде**

Ник һыҙлайһың, күңелем, ник юҡ өсөн
Ағыулайһың минең аңымды?
Көйҙөрөп һин эстән, һис ваҡытһыҙ
Сығараһың, ахыры, йәнемде.

Үҙеңде һин иҙеп янған менән,
Уйлама һин, ваҡыт үтер тип,
Ҡара төндә ҡара болот булып
Ерҙе баҫҡан зөлмәт китер тип.

Һине бәйләп тотҡан ныҡ бығауҙы
Бик тиҙ генә өҙә алмаҫһың.
Аяҡ аҫтың тулы тәрән соҡор,
Бик тиҙ йүгереп китә алмаҫһың.

Төкөр донъяһына, бул түҙемле,
Ағыулама юҡҡа тамырыңды,
Ысын ирекле алғы көн өсөн
Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде!

Һөйөү, выждан, иман, хаҡлыҡ кеүек
Матур һүҙҙәр — иҫкән ел генә;
Улар — сәмауи һүҙ, күктә улар,
Уларҙы тик һөйләй тел генә.

Ҡарғалған ер үҙенең тамуғында
Әле бик күп йылдар янасаҡ,
Рыя, нифаҡ, вәхшәт һаҙлығында
Бик күп йылдар батып ятасаҡ.

Ерҙең ире — йыртҡыс, тура килһәң,
Йыртыр, нисек йырта айыуҙар.
Ҡатын — зәһәр йылан, тейә ҡалһаң,
Мәңгелеккә һине ағыулар.

Уйлама һин тиҙҙән емерелер, тип
Яҡтылыҡты япҡан таш диуар.
Бик күп йылдар әле көсһөҙҙәрҙең
Күҙҙәренән ҡанлы йәш ағыр.

Зөлмәт - ҡараңғылыҡ.
Сәмауи һүҙ — күк һүҙе, изге һүҙ
Нифаҡ — эскерлелек.

**Әйҙә, милләт!**

Йөк ауыр, юл болғауыр булһа ла, милләт, әйҙәле:
Алда рәхәт ҡәҙерене белмәккә михнәт файҙалы.
Яҡты нурлы көндәрең алдында. Был хаҡ вәғәҙәһе.
Ана күренә ҡибла яҡлап бик матур аҡ шәүләһе.

**Үткән көндәр**

Бына әле генә сәхрәләрҙә
Йәш ҡолондай сабып уйнаным;
Бына әле генә һаҡмар буйын
йәш ҡолондай сабып буйланым.

Бына әле генә сәскәләрҙе
Өҙөп алып, айға ҡаҙаным;
Бына әле генә, айға менеп,
Сәскәләргә көлөп ҡараным.

Бына әле генә ҡыҙыл гөлдөң
Ҡыҙыл нурын һиптем йөҙөмә;
Бына әле генә фирҙәүестән
Урын алып төштөм үҙемә.

Бына әле илап, әле көлдөм,
Әле көйҙөм, әле һыҙландым;
Бына әле йырлап, әле тындым,
Әле бар донъяһын ҡыҙғандым.

Бына әле генә ләғнәт ороп,
Таштым, шаштым, ҡуптым тулҡындай,
Әле ғәффар булып, әле ҡәһһар,
Холоҡландым тәңрем холҡондай.

Бына әле үҙем һаман ошолай,
һаман ошо, мин — мин, һаман мин;
Күңел мең төрлөгә талпынғанда,
Көнөм бер төрлөгә янам мин.

Бына әле генә Ҡаф тауынан
Ен донъяһын иттем тамаша!
Ен донъяһы матур, йәмле икән,
Ҡомһоҙ донъя түгел дә баһа.

Мин дә шулай ниңә ен булманым,
Ник тыуманым Ҡафтау артында?
Ниңә ерҙә тыуҙым, әҙәм булдым,
Ник торманым Ҡафтау һыртында?

Ен балаһы булһам,
Ҡафтауында Тыуған булһам уттан - ялҡындан,
Йәнле тупраҡ булып йөрөмәç инем,
Эстән-тыштан туңып һалҡындан.

Мәхшәр көнө етмәй үлмәç инем,
Сереmәç инем тупраҡ аçтында;
Әҙәм улы кеүек йөрөмәç инем
Ҡәрҙәшемде бөтөрөү ҡәстында.

Ут матдәһе — иблис матдәһе тип,
Кемдәр уттың үҙен яманлар?
Пәйғәмбәрҙәр нәçеле булған менән
Иблистән дә уҙған әҙәмдәр!

Ғәффар - кисереүсе, гонаһлыларҙы ярлыкаусы.
Ҡәһһар - асыуланыусы, ҡаты яза биреүсе, иҙеүсе; өçтөнлөк итеүсе, еңеүсе.
Ҡәстында — теләгендә.

**Аптыраған минуттарҙа**

Мең төрлө уй, ҡатты баш,
Ни эшләргә лә аптыраш:
Яртым яна, яртым туңа,
Йәнем үлде яртылаш.

Ҡаҡты тулҡын, аҡты йәш,
Һүҙҙә ләғнәт, күҙҙә хәсрәт,
Эстә дәһшәт, ҡалтыраш.
(Булмай шул эш буталғас —
Мәсет таш, мулла йүкағас!)

Юл батҡаҡ вә лайла,
Ҡул-аяҡ бығауҙа,
Ҡыймылдап булмай ҙа!
Вә!., хәсрәт, вә вәйла!

Ут йөрөй үҙәктә,
Эс яна дозахта,
Урғылып ялҡындар,
Тоташты йөрәккә.

Йондоҙом өмөтһөҙ,
Күҙ илай өҙлөкһөҙ.
Ҡаҙалһын донъяһы —
Күңелгә ҡыҙыҡһыҙ.

Ян, бисара йән,
Там, ҡап-ҡара ҡан,
Көлһөн бөтә йыһан
Шәйехзада бисаранан!

Дозах — йәһәннәм.

**Аҡтыҡ зарым**

Валлаһи, һин сәнселеп кит, тонсоғоп үл, бөт, ҡаҙал,
Шунда ла һис кем дә күрмәҫ, валлаһи, бер эт ҡәҙәр!

Нишләйем һуң? Әйтсе, зинһар, сәнселәйемме, нишләйем?
Сәнселеп, сәсрәп сыгайыммы?.. Нишләһәң дә, эш ҡыйын.

Нишләйем һуң - зәҡҡумлы хәсрәттәр менән күңелем яна,
Нишләйем һуң — мәлғүн иблистәр төкөргән донъяға!

Зәҡҡум - ағыулы, әсе.

**Әйҙә, күңелем**

Әйҙә, күңелем, бында торма, күккә, күккә, күккә ос,
Күккә ос: күктә тыныс, бында һуғыш, бында ҡылыс!

Әйҙә күккә, бында йәм юҡ, күктә йәм бар, унда нур,
Бында нәмә: йәмле һындар. Унда хур бар, унда хур.

Әйҙә, ғүмерем, әйҙә, бәхетем, әйҙә, күңелем, бергәләп,
Бында булһа күбәләктәр, уңдалыр барлыҡ мәләк.

Мәләк - фәрештәләр.

**Гонаһ, яза**

Таянып эйәккә,
Күҙ текәп йыраҡҡа,
Ултырам уйланып
Бер үҙем бер яҡта.

Уйланам, уйланам,
Уй менән юғалам...
Бер ваҡыт кинәттән
һиҫкәнеп уянам.

Уянам, ни күрәм:
Әйләнә һәр тирәм,
Уй тәрән һәм томан...
Шаҡ ҡатып тик торам.

Мин, имеш, аҙам,
Мин, имеш, туҙам,
Гонаһым - туҙан,
Тау кеүек язам!

**Юҡ**

Атланым — эҙ юҡ,
Баҡманым: йөҙ юҡ;
Боҙланып күңелем,
Сатнаным: ҡыҙ юҡ.
Йәшлектән ләззәт
Тапманым: тоҙ юҡ.

**Донъяға**

Әй донъя, шашма,
Юҡты алдашма:
Һинең хәлеңә
Мин бит бик әшнә.
Беләм: һин ялған,
Белеп, алданмам!

Алдама мине,
Яҙың күрһәтеп,
Аулама мине,
Ҡыҙың күрһәтеп:
Яҙың киң түгел,
Ҡыҙың тиң түгел.

Һалҡын аҡылың
Үҙеңә булһын,
Теймә күңелемә,
Үҙемдә торһон:
Күңелем ялҡын,
Ғүмерем алтын.

Үҙ маяғымды
Үҙемсә ҡаҙап,
Үҙ һабағымды
Үҙемсә аңлап,
Юлдар яһармын,
Шулай йәшәрмен.

Күктә осормон,
Йондоҙ үбермен,
Диңгеҙ кисермен,
Теләһәм нишләрмен:
Мин ирек ханы,
Ханы, солтаны.

Мин үҙем әҙәп,
Үҙем нәзәкәт!
Донъя үҙемә
Итһен итәғәт!
Иманым — үҙем!
Ҡөрьәндер - һүҙем!

Нәзәкәт - гүзәллек.
Итһен итәғәт - буйһонһон.

**Ауырыуым-һаулығым**

Һау йөрөүҙән яҡшыраҡ
Аҡ юлга керткән ауырыуым;
Сәнселеп китһен хоҙайҙан
йөҙ сөйөрткән һаулыгым!

Эй, гәзиз тән, һыҙла, һыҡра
Йән ғазапты аңлаһын.
Аңлаһын да аллаһын
һәр даим теленән һалмаһын.

**Көтәм**

Йөрөгән саҡта башҡорт туғайҙарын
Йәнем әллә ҡайҙа елкенә;
Ишеткәндә моңло курайҙарын,
Йөрәгемә моңдар бөркөлә.

Тауҙарына менһәм, ҡырҙа йөрөһәм,
Балҡый йәннәт нуры — гөлөстан,
Меҫкен башҡорт ауылын килеп күрһәм,
Аңҡый хәсрәт, үлем — гүрестан.

Гүрестандай ғәмле ауылдарҙа
Ҡыбырлаша йәнле мәйеттәр,
Йәнле мәйеттәрҙең ғәмен көйләп,
Илап аға һаҡмар, Яйыҡтар.

Янып-көйөп, бәгерем өҙгөләнеп,
Ләғнәт уҡыйым, кемгә белмәйем,
«Килер микән аҡ көн беҙгә лә» - тип,
Уралҡайға ҡарап илайым.

Күрәм: үҙ олпатын боҙмай һаҡлап,
Урал ята әкрен, тын гына;
Ала шунда йәнде тынлыҡ ҡаплап,
Килә башлай тәмле уй ғына...

Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан
Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын;
Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,
Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.

**Шатлыҡ йыры**

Сайпылышып шатлыҡ тулҡындары,
Сәп-сәп бәрелә күңелем ярына;
Шул шатлыҡтар менән ҡаршы торам
Был донъяның барлыҡ зарына.

**Теләймен**

Хоҙайға илап, теләйем теләк:
Беләккә     ҡеүәт, йөрәккә йөрьәт.
Утлы пар кеүек һулыш теләймен,
Зөлфәҡәр кеүек ҡылыс теләймен.
Ҡабынһын донъя, бер өрһәм «өф» тип,
Табынһын миңә аждаһа, ғифрит!

йөрьәт — батырлыҡ.
Зөлфәҡәр - дини легенда буйынса, Мөхәммәттең Ғәли батырға бүләк итеп сиргән серле ҡылысы.

**Бәхетем**

Зәңгәр күк - тажым, сыбар ер - тәхетем,
Үҙем - азат йән, аҡ ҡояш - бәхетем.
Йондоҙҙар һәм ай - серсе дуҫтарым.
Һандуғас, турғай - йырсы ҡоштарым.

Сыҡһам сәхрәгә, гөлдәр, үләндәр
Тәғзим итәләр, биреп сәләмдәр.
Йән сәсәктәрем, гөл ҡанаттарым,
Оса янымда күбәләктәрем.

Латиф ел — саба, тип: «Мәрхәбә!..»
Һөйөп, иркәләп йөҙөмдән үбә.
Менһәм тауға, их, осайыммы һуң!..
Бөтә офоҡто ҡосайыммы һуң!

Гөлдәр йылмайған, ҡырҙар нурланған,
Бөтә ер-күге нурға сырмалған.
Шашам, ашҡынам... Шатланам сикһеҙ,
Азат мин, азат! Бәхетем офоҡһоҙ!

Тәғзим итәләр - ололайҙар.
Латиф — йомшаҡ.
Саба — таң еле.
Мәрхәбә - хуш килдең.

**Күктә — алла, Ерҙә — иблис...**

Күктә — алла,
Ерҙә — иблис, .
Мин — малай.

Береһе — «дин», тип,
Береһе — «мин», тип
Тартҡылай.

Белмәйем:
Әллә алла,
Әллә иблис
Алдалай?!

**Кем өсөн?**

Айға үрләп, нурҙа уйнап,
Күкрәгемде нурланым.
 - Ит ғәфү эй, ай, -  тинем мин, -
Нурҙарыңды урланым.

- Һис зарар юҡ, ал, — тине ай, -
Ал да сәс нур халҡыңа;
Мин дә бит төн хаҡына
Алдым ҡояштың нурҙарын.

**Тын төн**
*(Ауылда)*

Тын ғына, тып-тымыҡ бер тән ине,
Шишмәкәй шылтыр-шылтыр-шылтыр ине...

Йыраҡтан гөлдөр-гөлдөр арба килә,
Ул да тынлыҡты ҡуйыртыр өсөн генә;

Аръяҡта бер эт өрә, ул шул тынлыҡты
Ҡолағыма ҡыуып кертеү осон генә...

Мин ятамын, шул тынлыҡта уйлай-уйлай,
Ике күҙем йондоҙ һайын ырғып йөрөй.
Ҡай сағында аҡрын гына бер ел иҫеп,
Ағастарға минән йәшереп ниҙер һөйләй...

Йәсиғ уҙған, тән уртаһы яҡынлашҡан,
Тирә-яҡты ҡараңғылыҡ тамам баҫкан,
Яҡты менән томаланған йөҙҙәрҙең
Күҙкәйҙәрен ҡараңғы төн тамам асҡан.

Босмаҡтарҙа күп ҡараңғы боҫоп тора,
Төн сымырлап, ем-ем итеп тынып тора.
Йондоҙҙар күҙ ҡыҫыша, ҡайһы уйнай,
Ҡайһы береһе иламһырап, моңһоу тора.

Йәсиғ    - төнгө намаҙ ваҡыты.

**Йәмле көн**
*(Йәй хәтирәһе)*

Эх, бөгөн донъя кейенгән ҡыҙға оҡшап тәп-тәтәй,
Ҡыҙ булып баҫҡан тәбиғәт донъяға ап-аҡ тәпәй.

Хаузы кәүсәр шишмәһе өҫтөнән иҫкән ел кеүек,
Их, бөгөнгө ел һауанан бер ғәжәп ләззәт татый.

Ниндәй йәмле, их, бөгөн ожмах көнөнән йәмле көн.
Ҡайҙа ожмах... Фирҙәүес бер яҡта торһон хатта ки!

Хауз - яһалма күл.
Кәүсәр — йәннәт һыуы.

**Матур һындар**

Матур һындар, матур ҡыҙҙар, матурһыңдар,
Әйткән саҡта, исемегеҙ матур сыңлар,
Һеҙҙе күреп, йәмгә сумып, киттем иреп,
Ғаҡылһыҙҙар: «Ғаҡылһыҙ!» - тип баҡырһындар.
Ҡарап ҡарайыҡ: аҡыллылар нишләр икән,
Бар аҡылды көрәшергә саҡырһындар,
Ҡарап ҡарайыҡ: бер һылыуҙы еңер микән,
Сихри күҙҙән сихри уҡтар атылһындар.
Ҡыҙыл ирен бер йылмайһа, хоҙай шаһит,
Бөтә фекер әсир төшөр, аҡыл шөрләр.
Ике тәңре: әүүәле алла, икенсе - ҡыҙ,
Тимәһәгеҙ, билләһи, кафырһыңдар!
Күсөгөҙгә иман итеп, мин бағындым,
Йөрәгемә мөхәббәт һал, матур һындар!

**Тешһеҙ ҡыҙ**

Барып мин бер көн баҡсаға керһәм,
Бороп мыйыҡты, арлы-бирле йөрөһәм,
Күҙем төшмәҫме шунда бер туташҡа,
Бите ап-аҡ, һыҙылған ҡара ҡашҡа?

Белгем килде: был ҡыҙмы, ҡатынмы?
Тинем мин: «Иҫәнме, һаумы, аҡыллым!»
Боролоп ҡараны, көлөп күҙемә.
Тик яуап бирмәне әйткән һүҙемә.

Тағы әйттем: — «Туташ, ник дәшмәйһегеҙ?
Хоҙа биргән ауыҙҙы асмайһығыҙ?»
Тағы әйләнеп ҡараны туташым,
Үҙе өндәшмәй - тамам ҡаңғырҙы башым.

Уйланым мин уны телһеҙ икән, тип,
Ғажиз булдым, тагы нишләйем икән, тип
Ишара иткәйнем ултырырға,
Тотондо бит туташым ҡоторорға:

«Ниңә шин мине мышҡыл итәшең,
Улай булша, минең яндан китәшең!..»
Асыуланып, ауыҙын асһа йәнем —
Ике алғы теше юҡ икән уның!

Сәселә төкөрөгө тешһеҙ ауыҙҙың,
Һорағым килмәне исемен яуыздың,
«Асыуланма, — тинем, — һәм көлмәнем мин,
Һинең тешһеҙлегеңде белмәнем мин».

Йомоп йөрөү менән шулай ауыҙын,
Теш сығыр тип уйлай, ахыры, яуызың.
Ҡаш һыҙҙырҡан, ҡалын яҡҡан пудраһын.
Тик оноҡкан алғы тештәр ҡуйҙыраһын!

Дәшмәйһегеҙ - өндәшмәйһегеҙ.

**Остолар**

Горләшеп, дәртле минуттар
Остолар моңдар менән;
Мин төшөп киттем, төшөп киттем,
Төшөп киттем түбән.

Остолар моңдар һауаға,
Йырлашып ҡыҙҙар менән;
Мин тороп ҡалдым көйөп, әрнеп,
Күңел һыҙлау менән.

**Атланым эҙһеҙ**

Атланым эҙһеҙ,
Тапманым йондоҙ;
Боҙланып күңел,
Сатнайым ҡыҙһыҙ;
Үтте йәш ғүмерем,
Ләззәтһеҙ, тоҙһоҙ.

**Ҡыҙыҡ бөттө**

Тарау сәстәр туҙып бөттө,
Матур көндәр уҙып китте;
Матур көндәр, матур һүҙҙәр
Йөрәккә йәм һыҙып китте.

Матур йөҙҙә матур күҙҙәр
Матур уйҙар теҙеп үтте;
Бары китте, бары бөттө,
Хәҙер инде ҡыҙыҡ китте.

**Йәш шағирҙың ҡәбер ташында**

Ваҡлығы менән йыһандың ваҡһынаһым килмәне,
Ят үлемде ҡаршы алдым, ятһынаһым килмәне.

Донъяла йәнгә тыныслыҡ юҡлығын белгәс тамам.
Мин әле йәш, тип, үлемдән тартынаһым килмәне.

Тар ҡәберҙең ҡуйынына керҙем - ҡотолдом донъянан,
Сөнки биҙҙем донъянан, артыҡ тораһым килмәне.

Йәшләй үк керҙем ләхеткә, киң түшәкте тарһынып,
Төп ятаҡ булғанға ләхетем, тарһынаһым килмәне.

**Ҡышҡы юлда**

Их, рәхәт шыуа сана, юрта ат талғын ғына,
Яҡ-яғымда киң ялан йоҡлап ята тып-тын ғына.

Алдымда аҡ ҡар йәйелгән, ялтырап аҡ-аҡ булып,
Ынйы-мәрйендәр сәселгән өҫтөнә ваҡ-ваҡ булып.

Юл ситендә ҡар киҫәктәре торалар теҙелешеп,
Барыһы ла эйелеп ҡалалар, хуш-иҫән бул, тиешеп.

Аҡ ҡояш нур ептәрен һуҙған да ергә нур һибә,
Нурлы ептәрҙән ағып, моңло күңелгә йыр килә.

Йырлай башлайым, шунда һалҡын ел иҫеп, йырҙы киҫә,
Ай, уҫал ел ҡырҙағы бар йәмде, бар моңдо киҫә.

**Хәлебеҙҙән бер күренеш**

Ҡыҙҙар — иркә,
Ирҙәр — күркә,
Ҡатындар — ҡурсаҡ!
Аңҡый шәхсиәт,
Ялтырай тәрилкә,
Матбуғат — уйынсыҡ!
Күҙҙәр — йыландай,
Телдәр йыумалан.
Малайҙар үрмәләй,
Танауҙар — һималай!

**Йәшәһен эшселәр!**

Эшсе халыҡ ҡуҙғалһын,
Беләктәрен һыҙғанһын,
Теләктәрен ҡулға алһын,
Кәрәктәрен эҙләһен.
Эшсе халыҡ йәшәһен,
Тигеҙ юлдар яһаһын!

Эшсе халыҡ йәшәһен,
һөрһөн донъя сафаһын,
Берлек тыуын ҡулға алып,
Тигеҙ юлдар яһаһын.
Эшсе халыҡ йәшәһен,
Тигеҙ юлдар яһаһын!

Эшсене күп иҙҙеләр,
Улар һаман түҙҙеләр,
Фирғәүендәр, ҡарундар
Йөрәк майын һыҙҙылар.
Эшсе халыҡ йәшәһен,
Тигеҙ юлдар яһаһын!

Аңла, эшсе, үҙеңде,
Асып ҡара күҙеңде:
Бөтә донъя мөлкәте
Кем ҡулынан төҙөлдө?
Эшсе халыҡ йәшәһен,
Тигеҙ юлдар яһаһын!

Хаҡыңды ал хөр саҡта,
Берләшеп ҡал форсатта,
Форсат бирмә ҡорһаҡҡа,
Ҡорһаҡ тулмаç һис саҡта!
Эшсе халыҡ йәшәһен,
Тигеҙ юлдар яһаһын!

Эшсе теләй ғәҙәләт
Тигеҙһеҙлек - яманат.
Тулған ҡарун ҡарыны
Шиңә төшһөн самалай!
Эшсе халыҡ йәшәһен,
Тигеҙ юллар яһаһын!

Тигеҙһеҙлек сәнселһен,
Аяҡ аçҡа йәнселһен,
Бөтә донъя бер булып,
Тигеҙ нурга мансылһын!
Эшсе халыҡ йәшәһен,
Тигеҙ юлдар яһаһын!

**Афарин**

Афарин һеҙгә, ирек сулпандары!
Афарин, ысын изгелек солтандары!
Был ҡараңғы гүргә түнгән донъяның
Көн вә көн атмаҡта ысын таңдары.

Афарин, их... донъяға шатлыҡ килә.
Юйыла золмат, йылмайып аҡлыҡ килә;
Емерелә вәхшәт, хаҡһыҙлыҡ, золом;
Аҡрын, аҡрын нур сәсеп хаҡлыҡ килә.

Шатланам мин, күкрәгем ташҡан кеүек,
Түҙә алмайым, һикеренәм, шашҡан кеүек.
Афарин, эй һеҙгә миллион афарин;
Нурлы истиҡбал яҡынлашҡан кеүек!

Истиҡбал - киләсәк.

**Байҙарға**
*(Ураҙа айы мөнәсәбәте менән)*

Эй ҡалын ҡорһаҡлы бай, ҡорһаҡлы һәм «инсафлы» бай,
Ай буйына ас тороп, астар хәлен һиҙҙеңме, эй!
Туҡ тороп, рәхәткә күнгән эҫтәрең ҡыйналдымы?
Ас-ялангастарга шәфҡәт хистәрең уяндымы?

Уйланыңмы, социалдар тартышыуҙа хаҡлы, тип?
Социалдар ярлы, тапалған халыҡтар яҡлы, тип?
Уйланыңмы: ысын золом, ысын талау бит байлығың,
Байлығың күпме фәҡирҙең юймағандыр һаулығын!

Һеҙгә нәмә - көн дә байрам, һеҙгә көн дә тик тороу,
Ярлылар көн-төн егелгән, һеҙгә - көн-төн типтереү.
Ник былай был, ярлылар ҙа, бай кеүек, инсандыр бит?
Ярлылар ҙа, бай кеүек, рәхәт теләүсе йәндер бит?

Бер тигеҙ бай ярлы менән, юҡ уның артыҡлығы,
Булһа тик артыҡлығы - онҡотлого һәм мутлығы.
Бөтһөн инде: буржуаздар донъяға баш булмаһын!
Бөтһөн инде: ярлылар мохтаж-яланғас йөрөмәһен!

Бөтһөн инде киң йыһанда тар ҡәберҙәр тарлығы!
Бөтһөн инде бикләнеп ятҡан ҡарундар һандығы.
Йөрөмәһен инде фәҡирҙәр әлһерәп, хәлдән тайып!
Бер тигеҙ тотһон ураҙа һәм бер тигеҙ итһен ғәйет!

**Буржуй**

Ҡып-ҡыҙыл ҡандар йүгергән күҙҙәреңдең ағына,
Күҙләүең - ҡорһаҡ ҡына, һүҙҙәрең - донъя ғына.

Социал тимһең үҙеңде, ҡып-ҡыҙыл, тип, маңлайың?
Ник ҡыҙыл ул? Сөнки имгәнһең фәҡирҙәр күҙ майын.

Ник ҡыҙыл ҡандан буялған күҙ төбөңдөң керпеге?
Юҡ һинең күңелең төбөндә тамсы шәфҡәт бөртөгө.

Ник һинең мәҡһүр, ҡалын иренең ҡарағусҡыллана?
Сөнки күңелеңдә фәҡирҙәргә асыу, мыҫҡыл яна.

Шул көйөнсә һин тағы булған булаһың социал.
Уң беләккә бәйләп алғанһың ҡыҙылдан таҫтамал!

Мәҡһүр - ҡәһәрле.

## Мөртәт социалистарға

Иҫкерәк шиблит эсенән бысраҡ сылғау урап,
Социалисмын тип йөрөйһөң, ҡып-ҡыҙыл билбау урап.

Ҡып ҡыҙыл һүҙҙәр һалып йөрөттөң ҡара күкрәктә һин,
Бысраҡ төрҙөң дә ырғыттың ҡыҙыл сепрәккә һин.

Тышҡа сыҡтың — мәрхәмәт, шәфҡәтле һүҙҙәр һөйләнең,
Өйгә керҙең — ҡай фәҡирҙе изәтәм тип уйланың?

Тышҡа сыҡтың алдыңа тупраҡ һалып, икмәк турап,
Өйгә керҙең — торҙо алдыңда көмөштәр шылтырап.

Нәғрә орҙоң иҙмәһен тип бай фәҡирҙәр елкәһен,
Ә үҙең ас елкәһенән күпме дәүләт сиртәһең!

Тыштағы барлыҡ эшең ел яҡҡа һалпы ҡыҫтырыу,
Өйҙәге бар идеалың — бер тинде меңгә үҫтереү.

Изәтәм - эҙәрләйем.

## Көтәләр

Бер кеше ашлыҡ һуға, ырҙын табағын һелкетә,
Ашлығын һуҡҡан да инде, елгәрергә ел көтә.

Йәш егет бер йәш кәләш менән торорға башлаһа,
Күпме йыл торғас, хоҙайҙан ҡыҙ йәки бер ул көтә.

Ғүмере гел хурлыҡта үткән кәкрәйеп ҡатҡан бабай,
Йө, хоҙай, үлтер мине, тындыр мине, тип, сир көтә.

Мейес башында ҡатлы-ҡатлы бөркәнеп ятҡан әбей,
һалҡын алды, ҡалтырайым, терелер инем, тип тир көтә.

Нәҡ шулар күк, ер йөҙөндә инде күп ил мир көтә.
Ғазраилдан туйған инде - һәр кеше Ябраил көтә.

Төн ҡара, һүнгән фонарҙар, юл аҙашҡан юлсылар,
Инде һәр кем һүнмәй торған яҡты бер ҡәндил көтә.

Ҡар өйөлгән тау булып, туңған бөтә шәфҡәт һыуы,
Инде донъя йәмле, һөйөнөслө, йылы апрель көтә.

Ер йөҙөн һыу алһа ла, өйрәк яуызға кайғы юҡ
Ҡай берәүҙәр шатланып, сил өҫтөнә мең сил көтә.

һәр шәһәр, һәр ҡәрйәлә һалдатка калған йорт һайын,
Бер ҡауышһам, мең йәнем ҡорбан итәм, тип ир көтә.

Йәш, таҙа буйҙаҡ егеттәр илгә һау ҡайтһын, тиеп.
Сихри шаршауҙың эсендә наҙлы нәҙек бил көтә.

Эйе, герман тилмереп, мәңге тыныслыҡ — мир көтә,
Ғазраил, һин тәңреңә ҡайт: ил илап Ябраил көтә.

Мир (русса) - тыныслыҡ, солоҡ

**Һуғыш**

Был йәһәннәм, был һуғыш, был ҡанлы вәхшәт-ихтилал,
Ер-йыһан аҫты-өҫкә әйләнмәйсә, бөтмәҫ, ихтимал.

Күк йөҙөндә тын ғына йөҙмәктә йондоҙ, ай, ҡояш,
Ер йөҙөндә зилзәлә, дәһшәт, ғазап, ҡан, ҡанлы йәш.

Эй, илаһи күбәләктәр, һөйөнәһегеҙ, кет-кет тиһегеҙ.
Ер тулы хәсрәт, ғазап, аһ, әллә һеҙ һис белмәйһегеҙ.

Йәш сабыйҡай, йәш сабый һин, үҫмә, ҡал, шул хәлсә ҡал,
Үҫмә, донъя бәхетенә ҡал, саф йөрәк, пак йәнсә ҡал.

Ерҙә шайтан падиша фарман бирә: «Һуй, ҡыр, ҡырыл!»
Йә, Мөхәммәт, ҡыл шәфәғәт, мәрҡәдеңдән тор, терел.

Ихтилал — сыуалыш.
Мәрҡәд — ҡәбер.

**Өҙөләһең дә һыҙылаһың**

Ярһыналыр нәмәнәндер, түҙмәгәс, түҙмәй йөрәк,
Тарһыналыр, ни нәмәлер һыҙланып эҙләй йөрәк.

Эҙләнеү менән йыраҡтарға ғәзиз күңелем оса,
Һыҙланыу менән ҡулымдан донъяуи шөғөләм оса.

Ныҡ ҡына бәйләп тотайым елбәҙәк күңелемде, тип,
Юҡ ҡына эш менән тын уҙҙырайым ғүмеремде, тип,

Бар хыялдан, ярһыныуҙан мәңге йәшеренмәк булам.
Мәңгегә сабырым менән күңелемә баш булмаҡ булам.

Шул ваҡыт бер һын килеп, ай кеүек нур балҡытып,
Бер ҡарап, бер йылмайып, ул тайһа күҙҙән ялт итеп,

Аһ... тиһең, шундуҡ бөтә сабырың, ҡарарың емерелә,
Эстә тулҡындар ҡуба, дәһшәт, өйөрмә өйрәлә.

Һайрай башлай шунда ян-яндан гишыҡ былбылдары,
Яңғырай башлай бында асмандан мөхәббәт йырҙары.

Шунда тағы өҙөләһең дә һыҙылаһың әүәлгесә,
«Тынғыһыҙ йән» теҙмәһенә теҙеләһең әүәлгесә.

Донъяуи шөғөл - донъя мәшәҡәте.

## Минең фәрештәм

Зәңгәр күҙкәйҙәрен зәңгәрләтеп,
Гүзәл ҡарай минең фәрештәм.
Аһ! Шул күҙҙәр миңә йәндән артыҡ,
Бәхет табам ҡарап тороштан.

Ебәк сәсен үргән ебәк тартып,
Фири заттар уны үрешкән.
Елбәҙәкләп теккән зәңгәр бәрхәт
Зифа буйға бигерәк килешкән.

Һыҙылып төшкән нәҙек тылсым ҡашҡа
Ай нурҙары яуып һырышҡан,
Әллә ынйы, яҡут, әллә башҡа...
Теҙелеп төшкән тештәр бер иштән...

Һөйөнөп-һөйөнөп яна утлы йөрәк,
Бер һүҙ ҡатһа миңә һөйөнөстән,
Тауыштары уның аҫылыраҡ
Сылтырап аҡҡан көмөш инештән.

Фири заттар кисен айға баҫып,
Наҙлыҡайым менән күрешкән.
Бер-береһенә шунда ялғанышып,
Ай нурына һарылып үбешкән.

Шуны күреп, күктә хури заттар
Ғишыҡ көйөн йырлап бейешкән,
Шуны ишетеп, ерҙә күбәләктәр,
Гөл-сәсәктәр уйнап көлөшкән.

Зәңгәр күҙҙәренән шиғыр һибеп,
Көлөп тора минең фәрештәм,
Бер мин генә түгел, уны күреп,
Йыһан сәғәҙәткә ирешкән.

Фири заттар - бында: нәфис ҡыҙҙар.
Хури заттар - бында: хур егеттәре.
Сәғәҙәт — бәхет.

## Уйҙар уртаһында

Һис тотор хәл юҡ күңелдең теҙгенен,
Һис белер хәл юҡ фекерҙең төҙлөгөн,
Бер минутта мең түгел, миллион теләк,
Белә алмайым ҡай теләктең үҙлеген.

Алсы, тәңрем, был күңелдең йөҙлөгөн,
Һалсы күҙҙән был томанлы күҙлегем:
Аңҡы-тиңке ҡаптырып көндәр уҙа,
Инде аҙ-аҙлап безелдәр миҙгелем.

**Ҡотлау, теләк**

*(Яҡшы имтихан биреп, алғы синыфҡа күскән туташҡа)*

Ҡыл күперҙәрҙе үтеп, ожмахҡа кергән төҫлөһөң,
Юлға төштөң, ҙур маниғдарҙың үтеп иң көслөһөн.
Ал ҡабуллап, ал да һал шатлыҡҡа сумған күңеләңә
Тәбригемдең эҫеһен һәм эҫе ялҡын төҫлөһөн.

Һин кеүек зат һис ваҡыт ҡәлбен ғорурға ташламаҫ,
Был, минең төҫлө, ғәзиз танышын иҫенән ташламаҫ.
Бер теләктәш тиңдәшенән килһә бер ҡотлау әгәр,
Һин кеүек зат донъяға хурлау йөҙөнән фашламаҫ.

Бер һүҙ әйтһәң, һин кеүек зат сер итеп һаҡлар уны,
Бар хатанан һүҙ гонаһы ҙур икән ҡаплар уны.
Һин кеүек нур көлтәһе, шәфҡәт, шәфәғәт шишмәһе,
Бер таныш ир күкрәгендә кер икән паклар уны.

Ысын күңелдән мин теләктәш, алға баҫ баҫҡан һайын,
Изге матлапҡа табантын юлдар ас асҡан һайын,
Һәр күңелдән ҙур урын алмаҡсы булһаң донъяла,
Эй, туташ, кесрәй юғарылашҡан һайын, ашҡан һайын.

Бик имен мин: күкрәгендә мәңге ҡайнар милли хис,
Пак телеңдә илде маҡтап мәңге һайрар милли ҡош.
Бик имен мин: милли дуҫтарҙан зарарланмаҫ йәнең,
Милли дуҫтарға йәнеңде мәңге бәйләр милли хис.

Маниғ - ҡаршылыҡ.
Матлап - теләк.

**Әҡлимәгә**

Мин әле һеҙҙе, ғәфү ит,
Белмәйем, һеҙ кем, туташ?
Һеҙ берәй киҫкен туташмы,
Әллә бер меҫкен туташ?

Һеҙ ҙә шулай, белмәйһегеҙ
Мине - мин ниндәй йән?
Кем белә, мин әллэ һеҙҙе
Белмәгәнгә моңло йән!

Осрашыр, тип уйланым мин,
Ҡул менән әүәл ҡулың,
Уйлағандар күккә осто
Төштө әүүәл альбомың.

Альбомың алдымда, әммә
Ни яҙайым, белмәгәс?
Исмаһам, бер мәртәбә
Бульварҙы буйлап йөрөмәгәс?

Ни яҙайым, бер генә
Рәхмәт ниҡабың асмағас.
Гөл йөҙөңдән күңелемә
Илһам нурыңды сәсмәгәс?

Кил, туташ, әүәл күңелең
Ҡылдарын тибрәт элек,
Альбомыңа унан нурҙар
Ҡойормон мин шат булып.

Ниҡап - пәрҙә, япма.

**Мин китер саҡта**

Мин китер саҡта ғына һөйкөмлө күренә һәммә шәй,
Барсаһы шат, барыһы яҡты, барыһы нурлы миҫле ай!

Һеҙ миңә бигерәк тә нур, бигерәк тә яҡтырған кеүек,
Бер ҡарашың — Исрафил илһам сурын өргән кеүек.

Бер танышта һеҙҙе мин ҡуйҙым күңелдең өҫтөнә,
Бер танышта һеҙҙе оҡшаттым ҡәҙерле дуҫыма!

Бер танышта һеҙгә бағланды күңелдән хөрмәтем,
Оҡшаны ҡәлбең, һүҙең һәм нурға сумған килбәтең!

Был рыяһыҙ бер генә ҡат һүҙҙәремде ит ғәфү,
Китһә кәйефең, янда йөрөтмә, ташла утҡа, ит мәхү!

Шәй - нәмә.
Миҫле ай - ай һымаҡ.
Ит мәхү - юҡ ит.

**Зөһрәгә**

Әй, матур ҡыҙ Зөһрә йән,
Мин һине күрәм ҡасан?
Әй, Бибизөһрә, һиңә
Төштө ысын ғишҡым, ышан.

Бик матур, бик йәмле, тип
Мәрйәм апай маҡтаны.
Шул минутта күңелемде
Мөхәббәтең ҡапланы.

Күрмәһәм дә күргән кеүек,
Төштө ғишҡың ҡәлбемә.
Зөһрә ҡыҙҙы насип ит, тип
Доға ҡылдым тәңремә.

**Шәмсеҡәмәргә**

Әссәләмәғәләйкүм, Шәмсеҡәмәр!
Беҙ иҫән-һау, башҡаса юҡ яңы хәбәр.
Уңайлы ваҡытығыҙ булырмы икән,
Бөгөн кис һеҙҙең яҡҡа барһаҡ әгәр?

Бер төҫлө аҡҡан көнгә асыу итеп,
Һеҙгә барһаҡ, аҙмы-күпме асыу ҡаныр,
Беҙ барыуға аулаҡ булһа, тыныс булһа,
Ул саҡта өҫтөгөҙгә рәхмәт яуыр.

**Бағбостанда**

Эй илаһи, килде лә керҙе моронға тәмле еҫ,
Эй ғәзиз кис, йәмле кис һәм йәнле кис  илһамлы кис.

Йәмле өҫтәл өҫтөнә йәйгән матур аҡ эскәтер,
Эскәтер өҫтөндә ҡоймаҡтар нәфис еҫ еҫкәтер.

Эс, ҡунаҡтар, тип самауыр шатланып йырлап тора,
һәм дә Бағбостан йөҙө илһамлы ай күк яҡтыра.

Алдыбыҙҙа май менән балдар торалар: «Ҡап», - тиеп,
һат Бабич та ҡысҡыра: «Нығыраҡ аша, Исхаҡ», - тиеп.

Ул матур ҡыҙ Сафия ҡоймаҡ ташый ҙа сәй яһай.
Ҡып ҡыҙыл алма кеүек бешкән унын бит алмаһы.

**Ғәйет көнө**

Шатлан, мөьмин, бөгөн шатлан - ғәйет көнө,
Шатлығыңдан иҫер, мөьмин, аныҡ көйө.

Айыҡ йәндән йырлап ебәр ғәйет көйө, -
һин йырлай тип, фәрештәләр йырлаһындар.

һин йырлай тип, изге рухтар ергә керһен,
Әйләнәңдә нурҙар һирпеп уйнап йөрөһөн.

һөйөн, мөьмин, ғәйет шәриф ҡотло булһын,
һин һөйөнә тип, яуыз ендәр илашһындар.

һөйөн, һөйөн, байрамыңды һөйөп-һөйөп,
Йырла, уйна, хур ҡыҙҙары торһон бейеп,

«Бәрәкалла, һиңә рәхмәт булһын», - тиеп
Ерҙәр, күктәр берләшһендәр, серләшһендәр.

**Исемдәр баҡсаһы**

Ҡәләмемә күңел енен ҡағылдырған,
Тиле күңелде үҙ юлына абындырған
Ике нәмә әүәле алла, икенсе ҡыҙ
Бәндәләрҙе ҡөҙрәтенә табындырған.

Сара
Ҡашың ҡара, күҙең ҡара, Сара туташ,
Күтәрелеп бисараңа ҡара, туташ!..
һинең өсөн өҙөлә эсем көнөн-кисен,
Ас үҙәктә ғишыҡ уты яна, туташ!

Сырур
Сырур туташ, алһыу йөҙөң, күҙең күркәм,
Тыуҙыңмы әллә алһыу нурлы йәйе иртән?
Күтәрелеп бер ҡарарға ҡыя алмаймын:
Сихырланып үлермен тип ҡурҡам, иркәм.

Маһира
Эй, Маһира, хоҙай биргән вәҡарың бар,
Вәҡар менән матур итеп баҡарың бар,
Ялҡының бар яндырырға уйлағанда,
Туңдырһаң да үҙ ҡулыңда сәҡарың бар.

Вәҡар - мөһабәтлелек, олпатлылыҡ.
Баҡар — ҡарау.
Сәҡар — тамуҡ.

Нәфисә
Нәфисәгә сәләм нәфис ел арҡыры,
Беләһегеҙ, уңған туташ — һөнәр ҡоло.
Шағирҙарҙың күбеһенә илһам килә
Һеҙҙең кеүек наҙлы нәфис бил арҡыры.

Мәрйәм
Аҡ күңелле, асыҡ йөҙлө Мәрйәм туташ,
Исемеңде хөрмәт иткән аллаң, туташ,
Мин дә һине хөрмәт итәм, мәрхәмәт ит,
Һинән һорай мәжрух йөрәк, мөрһим туташ.

Мәжрух - яралы, йәрәхәтле.
Мөрһим - уңалтыусы, һауыҡтырыусы

Әсхәпъямал
Әсхәпъямал, нурың арта сәсҡап менән,
Ынйы теҙгән кесерәк кенә ҡалпаҡ менән,
Һин оҡшайһың күлдә йөҙгән аҡҡоштарға,
Йөрөгәндә аҡ күлдәк, аҡ башмаҡ менән.

Өммөгөлсөм
Сифатыңды тәүсиф итәм, Өммөгөлсөм,
Үҙәгенә былбыл кергән тере гөлһөң,
Көслө йөрәк һине күрһен, йәмгә сумһын,
Түҙемһеҙҙәр үлгән хәлдә, таңға керһен.

Тәүсиф итәм - тасуир итәм.

Өммөкамал
Кәмаләтең бөйөк һинең, Өммөкамал,
Йәнде йәнгә тоташтырған һин бер канал,
Тупаҫ, наҙан һине күрһә, ул да әйтә:
«Нәғләт икән, ниндәй сибәр бынауы мал!»

Кәмаләт - камиллыҡ.

Бибиәсмә
Тауышың шишмә, телең тәмле, Бибиәсмә,
Итәктәрең килешкән буй-буй таҫма.
Ғишыҡ тигән даръя булһа, шул даръяла
Күңел һауытын сайҡар өсөн һин бер баҫма!

Өммөхәя
Ҡашың йәйә, керпегең уҡ, Өммөхәя,
Йөрәгемә утың керҙе, мине ая!
Аяманың — ташлап киттең әллә ҡая,
Ник ташланың? Ҡая вәғәҙә, ҡая хәя?

Хәя - оят.

Ғәнбәр
Мисек, ғәнбәр еҫе аңҡый, Ғәнбәр, һиндә
Күҙ алдынлы ҡосоп торған йәм бар һиндә,
Мөхәббәтле, эҫе, көслө ҡан бар һиндә,
Үҙ алдына осоп торған йән бар һиндә.

Мисек, гәнбәр - хуш еҫле майҙар исеме.

Һылыубикә
Һылыубикә - һылыу туташ, ҡыҙ солтаны,
Бит уртаңда ҡара миң бар - бит сулпаны.
Ауыҙың зәмзәм, иренең кәүсәр, тешең гәүһәр,
Ҡалҡыу түшең - тигеҙ ерҙә һөт вулканы!

Хәят
Хәят туташ, ауыҙыңдан ынйы яуа,
Һинең менән бер һөйләшеү дәрткә дауа,
Зәңгәр тулы күҙҙәреңде бер һирпеһәң,
Бөттө инде, бөтә әҙәм һуштан ауа.

Мәймүнә
Мин, Мәймүнә, тигәндә, мәймүн булам.
Туңған даръя ташып китә, сәйхүн булам,
Гөжләп торған самауырҙың түбәһендә
Мин, гүйә ки, пар-быу кергән сәйгүн булам.

Мәймүн - маймыл.
Сәйхүн - Сырдарья.

Зәйнәп
Зәйнәп туташ ҡара сәсен майлап тора,
Былбыл кеүек, сәскә тотоп, һайрап тора,
Ярты ай күк, маңлайының тирәһендә
Сәс бөртөктәр тулҡынланып, байнап тора.

Гөлгөнә
Гөлгөнәнен керпектәре гөл кейенгән,
Ике күҙе киске тымыҡ күл, тиелгән,
Ай, ҡояштың аҡ нурҙарын оялтырлыҡ —
Күҙҙәренә сөм-ҡараҫҡыл нур йыйылган.

Мәғрифә
Мәғрифәкәй, һинең төҫөң һоҡланырлыҡ,
Ниндәй генә күңелгә лә туҡланырлыҡ,
Бик аҙ гына шаҙралыҡ бар, булһа булһын,
Зарар юҡ, кершән яҡһаң, ипләнерлек.

Баҙаргөл
Эй, Баҙаргөл, матурлыҡта баҙарың бар,
Минең һиңә ике төрлө назарым бар:
Ул һимеҙлек, ул тигеҙлек биргән хоҙай,
Һаҡлан, туташ, күп маташһаң, аҙарың бар!

Назар - ҡараш.

Туғыҙаҡ
Туғыҙаҡ туташ, һин мөжәссем биҙәк мәллә?
Мөхәббәтең көйҙөрәлер - дозах мәллә?
Һөйөүемде әйтәм тиһәм, тел бәйләнә,
Ул күҙҙәрең сихырлы бер тоҙаҡ мәллә?

Мөжәссем - кәүҙәләнгән

Алтынҡай
Алтынҡайҙың яңы тыуған ай ҡашы бар,
Ҡолағында бриллиант күк алҡаһы бар,
Ҡулдарында — алтын йөҙөк бармаҡ һайын,
Сәскә таҡҡан сылтыр-сылтыр тәңкәһе бар.

Айзирәк
Айзирәк ҡыҙ - ай зирәк ҡыҙ, үткер теле,
Изгеләрҙән изгерәктер, юҡтыр кере,
Күҙҙәр тылсым, һүҙҙәр әфсен, йөҙө әфлисун,
Уның кеүек ожмахында юҡтыр хуры!

Йомабикә
Йомабикә, һин йома көн тыуғанһыңдыр,
Ҡулдарыңды мамыҡ менән йыуғанһыңдыр,
Сәмауаттан был донъяға инмәç борон,
Хурҙар менән нур тауында шыуғанһыңдыр.

Сәмауаттан — күктәрҙән.

Миңлекәй
Ике яҡта ике миңе Миңлекәйҙең,
Урталағы ҡараһы күк тулған айҙың,
Яман күҙҙән тулған йөҙҙө һулдырмаçҡа,
Күктән ингән һаҡсы улар бер хоҙайҙың.

Бикһылыу
Бикһылыу һылыу була һырғаһыҙ ҙа,
Ебәк күлдәк, ҡырҡ итәк бөрмәһеҙ ҙә.
Уның күҙе тыуғанда уҡ һөрмәләнгән,
Керпектәре йым-йым итә һөрмәһеҙ ҙә.

Аланҡыуа
Изге намың ишеттениһәм, Аланҡыуа,
Йөрәгемдә һиңә ҡаршы сәләм тыуа.
Һөйөп алып, һөйөп барһаң, ҡыуаныс бар:
Бер ҙә шикһеҙ Сыңғыҙхандай бала тыуа!

Нам — исем.

Мәрйенбикә
Мәрйенбикә, иренең мәрйен, ауыҙың уймаҡ,
Мөмкин түгел ул ауыҙҙы үбеп туймаҡ.
Уттан эҫе, гөлдән еҫле ҡосағында
Ятһаң ине ауыҙың үбеп, уйнап-уйнап.

Ҡәләнфер
Эй, Ҡәләнфер, көмөш, тимен тырнағыңды,
Ҡәнәферҙең һабағы, тим бармағыңды.
Баҫҡан ереӊ йәшәреп һәм балҡып ҡалыр —
Хызыр бабай өшкөргәндер аяғыңды!

Айҙарһылыу
Айҙарһылыу, маңлай сәсең айҙарланған,
Күҙҙәреңдә ғишыҡ быуы ҡайнарланған.
Был донъяға һин ингәстен, тәңреһенә,
Минән нурлы яраттың, тип ай зарланған.

Изумруд
Изумруд туташ изумруд теҙгән муйын буйлап,
Ҡыҙыл тамсы тамып тора ирен буйлап.
Күҙҙәренән шаян нурҙар ағып сығып,
Ал йөҙөнә таралалар морон буйлап.

Алмагөл
Алмагөл, аһ, бешеп еткән алмалы бит,
Иманлы бит, илһамлы бит, аллалы бит.
«Үп!» — тине лә үптермәне, күҙҙән тайҙы,
Аһ, сихырсы алмалы бит алданы бит!

Рәбиғә
Рәбиғәнең матур тауышы, моңло наҙлы,
Наҙы менән аулап ала ир-шаһбазды.
Һандуғастар уның наҙын маҡтап һайрай,
Уның өсөн яратҡандыр нурлы яҙҙы.

Ир-шаһбаз — ир-егет.

Гөлбәғидә
Бәғид түгел, гөлдән булһа Гөлбәғидә,
Гөлгә оҡшай ҡул вә бармаҡ, тырнағы ла,
Гөл бағында гөл эйәһе кейҙергәндер —
Гөлдән теккән өҫтөндәге күлдәге лә.

Бәғид түгел — алыҫ түгел.

Сажидә
Сажидә бер кәрамат саз шикелле,
Сазында миллион сәждә аҙ шикелле.
Ҡәғбә итеп әйләнәһен әйләнәһең,
Барыбер ул алла ҡушҡан хаж шикелле.

Кәрамәт саз — серле музыка ҡоралы.
Хаж - Мәккәлә ғибәҙәт.

Хәҙисә
Хәҙисәнең исеме өҫтөндә гөлдәр үҫә,
Ҡоштар һайрай, елдәр иҫә, көлдөниһә,
Яңғырап сыҡҡан йәмле тауыш, ҡоса-ҡоса
Баш өҫтөндә әруах оса нисә-нисә.

Әруах - рухтар.

Мәғфүрә
Бар ине, аһ, Мәғфүрәне күргән саҡтар,
Мәхмүр күҙҙән күңелгә рух өргән саҡтар,
Шул гүзәлде уйлап-уйлап иҫтән тайып,
Нисә көндәр ашап-эсмәй йөрөгән саҡтар!

Мәхмүр - иҫергән, сихырланған.

Зифа
Зифа туташ, буйың зифа — зелпенеке,
Арҡа сәсең — сем-ҡара ял — йылҡыныҡы,
Сеү, сеү... баҡма! Күҙ уҡтарың яман сәнсә,
Бер яғыңда тороп торһон — терпенеке.

Зөләйха
Эй, Зөләйха, бер йылмайһаң, иҫертәһең,
Бер минутта биш туңдырып, биш иретәһең.
Бер яҡ күҙең бер яҡ ҡырын бер генә һал.
Шул ваҡытта осортаһың, осортаһың...

Фирҙәүес
Һораһаң Фирҙәүесте - фирҙәүеслек,
Тәүсифына һүҙ таба алмай, тиргә төштөк,
Буйы-һыны, ҡыланышы әйтеп тора:
«Хурҙар менән бергә тыуҙыҡ, бергә үҫтек».

Тәүсиф - тасуирлау, һүрәтләү.

Асия
Асияның күңел бәхете көҙгөнән дә,
Һин дә шулай булам тиһәң изге бәндә,
Туҡһан туғыҙ мәртәбә алла, тигәс,
Асия, тип ҡысҡырып ҡуй йөҙ тигәндә.

Һажәр
Һажәр туташ күктән ергә һижрәт иткән,
Һижрәт итеп, матурлыҡҡа хеҙмәт иткән,
Нурынан беҙҙе мәхрүм ҡалдырҙы, тип
Артынан фәрештәләр эҙләп киткән.

Гөлнур
Гөлнур туташ, гөлөң бар бит, нурың бар бит,
Күҙеңдә сур, күкрәгеңдә түрең бар бит,
Һигеҙ ожмах ҡаршыһында һинең менән Ер маҡтанған:
«Минең дә бер хурым бар», — тип.

**Тупраҡ**

Тупраҡ беҙҙең анабыҙ,
Беҙ тупраҡка балабыҙ.
Тупраҡ, тупраҡ, тупраҡ!
Күкрәктәге сәнабыҙ.

Тупраҡ беҙҙең атабыҙ,
Беҙ тупраҡка ятабыҙ.
Тупраҡ ҡәҙерен аңламау
Беҙҙең өлкән хатабыҙ.

Тупраҡ өсөн яналыйҡ,
Тупраҡка шәмдәр һалалыйҡ,
Үҙебеҙҙең инәбеҙҙе
Үҙебеҙгә алалыйҡ!..

Тупраҡ башҡорт бәхетелер,
Бәхетебеҙҙең тәхетелер.
Тупраҡ ҡалһа истиҡбал
Нурлы, раушан, яҡтылыр.

Тулыр илгә батырҙар,
Аҡ шоңҡарҙай аҡындар.
Арыҫландай айҙарҙар
Әйләнеп үк ҡайтырҙар.

Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,
Бүтәнсә юҡ сарабыҙ.
Тупраҡ китһә, һау бул, донъя,
Өҙөлмәктер самабыҙ.

Сәна - маҡтау, маҡтаулы һүҙ.
Раушан - яҡтыртыусы, нурлы, асыҡ.

**Список № 9**

Ошо көндә бер күпер алдында һеҙ - ҡылдан нәҙек,
Ҡурҡыныс, бик ҡурҡыныс, аһ, китһәгеҙ юлдан яҙып.

Ул күпер аҫты тамуҡтыр, аръяғында - фирдәүес,
Кисһәгеҙ, ух... ниндәй ҡыҙыҡ, уңдан аҙыҡ,һулдан аҙыҡ.

һеҙ кисерһеҙ ул күперҙән шатланып, рәхәтләнеп,
Тик фәҡәт башҡорт өсөн булған пыраҡка атланып.

Башҡалар биргән һарыҡ-ҡуйҙарға һеҙ атланһағыҙ,
Ант итәм, йығылып төшөрһөҙ аҫҡы ҡатка ҡапланып.

Нәрҫә ул һеҙҙе тамуҡтан ҡотҡара торған пыраҡ?
Ул пыраҡтыр туғыҙынсы номерлы исписканң — сыраҡ.

Шул номерға бир тауыш, алмаҡсы бул һан тупраҡ,
Юҡһа тауышың ситкә китһә, йәмле ерҙәр әлфираҡ!

Китһә ерҙәр, бел шуны: мәсет китер, мәктәп китер,
Йәмле башҡорт ерҙәрен сирмеш, урыҫ ҡаплап китер.

Ер һиңә, тик ер: донъяң да — ер, ғиҡабың да — ер,
Ерҙән айырылһаң, һине һәр кем иҙеп, тапап китер.

Эй, туған башҡорт, әгәр булмаһаң бәдбәхет,
Ерҙе һаҡла, ер ҡосаҡла, ер һиңә алтын тәхет!

Беҙ туғыҙ ҡат әйтәбеҙ: алдаусылар байтаҡ булыр,
«Дин» тиеп, «милләт» тиеп майлаусылар ҙа тал булыр.

Тыңлама, алданма, башҡорт, бир тауыш тугыҙынсыга!
Шул ваҡыт йөҙ аҡ булыр һәм изге күңелең шат булыр!

Ғиҡаб — яза, ғазап.

Был назым Учредительный собраниеға һайлау ваҡытында Ырымбур һәм Пермь губернаһындағы башҡорттарға листовка сүрәтендә баҫылып таратылғайны. Өфө губернаһы башҡорттары 9 урынына ҡуйып уҡырҙар. (Ш. Бабич иҫкәрмәһе.}

**Олуғ шатлыҡ**

*(Башҡортостан мөхтәриәте иглан ителеү һәм Каруанһарай ҡулга алыныу мөнәсәбәте илә)*

Янғырап, шаулап сыҡҡан шатлыҡ йырын
Фәрештәләр һөйөнөп тыңлаһын.
Шатландырҙың тәңрем, һибеп нурың,
Башҡортостан халыҡ донъяһын.

Ябраил мәләк, елпеп ап-аҡ ҡанат,
Осоп йөрөһөн Башҡортостанда.
Хәбәр бирһен тиеп: «Булдың азат!
Сыҡтың йәмле, гөллө бостанға».

Азат булды ғәзиз Каруанһарай,
Азат булды барлыҡ ерҙәрең...
Йырлап ебәр һөйөнөп, уйнап ҡурай,
Сыҡһын тиҙерәк шатлыҡ йырҙарың.

Теләктәрең алға килүб тора,
Азатлыҡҡа ошбу ғәләмәт.
Инүб тора «дәүләт», ҡунуб тора,
Киләсәгең яҡты, сәләмәт...

«Бәхет ҡыҙы» матур йөҙөн асуб,
Һиңә табан көлөп бороллдо...
Шатлан, уйна, һикер ярһып-ярһып!
Күпме шатланһаң да урынлы...

Үләм... Ташам... Тормайым, ашам күккә...
Үкенмәйем инде үлһәм дә...
Үкенмәйем инде тыуған йортҡа
Күкдин ҡарап көлөп торһам да...

**Истиҡбал**
*(Оло Башкортостан ҡоролтайына килгән вәкилдәргә)*

Әссәләмәғәләйкүм, ысын ихластан!
Тулҡындар, ташып сығып, баштан ашҡан,
Күңелдә балҡып янған матур хыял
Зиһендә ләүкә-ләүкә ҡарарлашҡан.

Мәрхәбә, ил-азамат, хуш килепһең!
Үҙеңде бимазалап көс килепһең,
Йәнеңдә ил бәхетенә шырпы ҡапҡан,
Иреклек көкөртөнә ышҡылыпһың.

Мәрхәбә, ҡоролтайға утлы сәләм,
Мәрхәбә, ил ҡәҙәме - ҡотло ҡәҙәм.
Ҡойоп кит ихлас менән нурлы кәбән,
Башына ултыртып ҡуй ҡотло әләм.

Туғандар, килде донъя хайран булып,
Әүерелде вайран донъя байрам булып,
Ел иҫте, дауыл ҡупты... һалды ҡуйҙы
Баҫҡыстың аҫтын-өҫкә әйләндереп.

Ғүмерҙең көҙө үтте, яҙы килде,
Бәхеттең һаҙы китте, наҙы килде,
Ялт итеп ерҙән сыҡты күктән көткән,
Тарихтың күп эсенән «аҙы» килде.

Һалынды нурҙан күпер упҡын ярға,
Әйҙәгеҙ, шул күперҙән алға-алға!
Ҡапуғын һигеҙ ожмах асып ҡуйып,
Керергә бирҙе  фарман рәхим алла.

Әйҙәгеҙ, форсат тура килгән саҡта,
Сит илдәр каруан-каруан йөрөгән саҡта,
Ярашмаҫ арыҫланға ҡуянланыу,
Ниғмәтте әүлән-әүлән күргән саҡта.

Тилмерә һеҙгә ҡарап Башҡортостан,
Үлемдән уны һаҡлау һеҙгә төшкән.
Теләймен, өлкән мәжлес үтһен күркәм,
һөйөнһөн Башҡортостан, Йәшел бостан.

Мәрхәбә, ҡоролтайга утлы сәләм!
Мәрхәбә, ил ҡәҙәме — ҡотло ҡәҙәм!
Ҡойоп кит һин мәңгелеккә нурлы кәбән,
Башына ултыртып ҡуй ҡотло әләм!

Мәрхәбә - хуш килдегеҙ.

**Башҡортостан**

Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ,
Таптаймын тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.
Ил өҫтөнә сапҡан яу
Башҡорт йәнен ҡаҡшатмаҫ,
Бысраҡ табан аҫтында
Башҡорт намыҫы ятмаҫ.
Башҡортостан — гөлбостан,
Сөнбөлөстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!
Башҡортостан баҡсаһы —
Арыҫландар торған ер;
Арыҫландар бабаһы —
Ҡаһармандар йөрөгән ер;
Ҡаһармандар кәүҙәһен
Ҡосаҡлаған, күмгән ер;
Хәләл ҡандар шәүләһен
Күккә тәрсим ҡылған ер.
Башҡортостан — гөлбостан,
Былбылстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт тигән арыҫлан.
Башҡорт халҡы тарихта
Ғәйрәт менән фаш булған;
Киң иреккә ашҡынған
Күңелдәге ташҡындан;
Һәр ваҡытта намыҫын
Үҙ башына баш ҡылған;
Тыуған илен һаҡлауға
Үҙе булған таш ҡурған.
Башҡортостан — гөлбостан,
Рәйханостан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт улы арыҫлан.
Көслө намыҫ, ташҡын йән
Торҙо, тағы ҡалҡынды;
Тағы башҡорт халҡында
Иҫке ялҡын балҡыны.
Мең йәһәннәм тыуҙырыр
Бер башҡорттоң ялҡыны;
Миллион ожмах яратыр
Бер Уралдың алтыны!
Башҡортостан — нурбостан,
Рәйханостан, гөлбостан.
Шунда тыуган, шунда үҫкән
Башҡорт улы арыҫлан.

Уралҡайҙың аҫты алтын,
Өҫтө шиғыр, үҙе нур;
Киләсәктә был ергә
Хоҙай үҙе ҡыҙығыр;
Фирҙәүестәр төҙөлөр,
Әлуан нигмәт теҙелер;
Күкте ташлап мәләктәр,
Был ерҙәргә гиҙенер.
Башҡортостан — йәмбостан,
Илһамстан, шиғырстан,
Шунда тыуган, шунда үҫкән
Башҡорт намлы арыҫлан!

Ҡыуан аңлап, эй, Ватан,
Беҙ аңланыҡ хәлеңде;
Һине һалып ҡулбашҡа,
Беҙ йөкләнек ғәмеңде.
Ғәреш әғлә өҫтөнә
Мендерербеҙ даныңды;
Беҙ фидаи һинеңсөн —
Йәшәтербеҙ намыңды!
Башҡортостан йәшәһен,
Сөнбөлөстан йәшәһен!
Шунда тыуып, шунда үҫкән
Арыҫландар йәшәһен!

Тәрсим ҡылған - һүрәтләндергән
Әлуан ниғмәт – төрлө ашамлыҡ-эсемлек
Ғәреш әғлә - юғары кимәлгә.

**Байрам**

Байрамҡайың, башҡорт, ҡотло булһын
Шатлыҡ менән тулһын йөрәгең;
Бер аллаңдан һора изге көндә
Ҡабул ҡыл тип башҡорт теләген.
Теләй күрең, юҫыҡ ҡустыларым,
Башҡорт халҡы бәйҙән сыҡһын тип,
Ирек алған иркен далаһында
Ҡыуанысмән байрам итһен тип.

**Һау бул, байрам**

Бәлки, һеҙ байрам бөгөн тип һөйөнәһегеҙҙер шау килеп,
Уйламайһығыҙмы ватанды сапты мәлғүн яу килеп,
Ҡан туфаны илде баҫты, донъя шашҡан саҡ хәҙер,
Инде һуң байрам яһап, мөмкинме булмаҡ шад хәҙер!..
Бел, туғанҡай, был ауырлыҡ көндәре уҙмаҫ борон,
Был «ҡыҙыл мәлғүн» яуы көлдәй булып туҙмаҫ борон,
Беҙгә сын байрам да юҡ, сайран да юҡ, сын туй ҙа юҡ,
Киң, матур илкәйҙе һаҡларҙай бүтән уй уйҙа юҡ.
Ал ҡорал, бар, кит фронтҡа!.. Ит ләғиндәрҙе мәхү!
Теш ҡыҫып торһон әле барлыҡ уйын, көлкө, ләһү!
Хуш, оло байрам, иҫән бул, ҡаршы киттек яуға беҙ,
Шат ҡауыштырһын икенсе килгәнеңдә аллабыҙ.

Мәхү - юҡ итеү, ҡырып ташлау
Ләһү - күңел асыу, уйын көлкө

**Ғәскәр маршы**
*(«Эскадрон» көйөнә)*

Тайярбыҙ беҙ Ватан фарманына,
Ысын ихлас биреп, баш ороп;
Тыуған илебеҙҙең ҡорбанына
Йәнде-тәнде һөйөнөп тапшырып.
Илебеҙ түшәк, еребеҙ карауаттан,
Ҡары-боҙо эҫе юрғандай;
Түҙемлебеҙ батыр Салауаттай,
Күкрәк ғәйрәт менән тулғандай.
Утлы беләк беҙҙең утын яҡһа,
Кибер төҫлө өлкән диңгеҙ ҙә;
Ныҡлы беләк беҙҙең уғын атһа,
Тейер төҫлө Сулпан йондоҙға!
Беҙ йөрөйбөҙ илде һаҡлайбыҙ тип,
Һаҡларбыҙ һәм Башҡортостанды;
Тураҡлайбыҙ, илде таптайбыҙ тип
Ҡаршы килгән яуыз дошманды!
Илкәй өсөн сыҡһын ғәзиз йәндәр,
Ҡунһын шәһит рухтар талына;
Хәләл ергә аҡһын хәләл ҡандар,
Бабайҙарҙың ҡаны янына.
Беҙҙең ғәскәр, әйҙә, алға марш!
Тетрәп торһон ер-күк, асманы.
Беҙ арыҫлан, беҙ бит һәм юлбарыҫ,
Яңы Башҡортостан ғәскәре.

**Ғәскәр доғаһы**

Яһу аллам! Һинән һорап ярҙам,
Ярһып йөрөйөм үлем ауыҙында.
Үлһәм, шәһит булһам, ҡанлы кәүҙәм
Балҡып йөҙһөн ожмах хауызында.

Айа, ғафур, айа, рахман рәхим!
Рәхмәтеңдән ситкә ҡайырма!
Ҡурҡытмаһын мине шайтан ражим,
Ныҡ имандан мәңге айырма!

«Тау эйәһе» тәңрем, таштарыңдан
Беләгемә ҡаты ныҡлыҡ һал!
«Ут эйәһе» тәңрем, уттарыңдан
Йөрәктәргә үтмәҫ утлыҡ һал!..

Диңгеҙҙәрҙе сайҡап тулҡынлатҡан,
Эй, ҡөҙрәтле «диңгеҙ батшаһы!»
Тулҡынланып мин дә дәрт-ғәйрәттән,
Диңгеҙ кеүек күкрәк ҡаҡһамсы!..

Раббым, һиңә һығына Башҡортостан,
Ишет мазлум башҡорт аһтарын!
Ҡан болото китһен инде өҫтән,
Һалсы рәхмәтеңде, ғаффарым!..

Намыҫ өсөн, тәңрем, йәндән кисәм,
Килтер вәғәҙә... Ҡөҙрәт ҡулың бир!
Башҡортостан иҫән ҡала тиһәң,
Бер йәнемә миллион үлем бир!

Ғаффар - кисереүсе, гонаһтарҙы ярлыҡаусы.

**Дошмандар**

Тыш яҡтан йылмаңлап, дошмандар
Төшкәндәр беҙ төшкән юл менән;
Яҙыҡлы, ләғнәтле ҡул менән
Беҙ ҡосҡан баланы ҡосҡандар.

Алданма, аҡ күңел башҡортом,
Юлатма йыланды ҡуйыныңа;
Һарылып мәлғүндәр муйыныңа,
Башыңды мөнйөрҙәр аҡыртып.

Ҡуя тор киңлекте, аҡлыҡты,
Ҡара бул, зәһәр бул дошманға;
Сер бирмә һыналған ҡуштанға,
Башыңа бетеү ҡыл һаҡлыҡты.

**Шәфҡәтем**
*(Йөрәгем бүләге)*

Алланың киң рәхмәтенә тиң минең киң шәфҡәтем;
Күрһәтә шул шәфҡәтем ләззәт итеп ер ләғнәтен!
Күкрәгемдең михрабында ултыра шәфҡәт яндырып,
Нурлы шәфҡәттән яралған бер мәләктән саф ҡатын.

Эҫе шәфҡәттәр түгә ул бәғеремә, көн-төн илап,
Балҡыта күңелемде шәфҡәттән биҙәктәп, ынйылап.
Һүндерер ләза утын күңелемдә шәфҡәт йәштәре;
Бар зобаниҙар ояләғандан торорҙар ҡул биләп.

Кил, йылан, кил, миндә үс юҡ, һис ҡурҡма, кил дә саҡ!
Ажғырып кил, саҡ мине, минән һиңә эҫе ҡосаҡ.
Саҡ мине, кил, теләһәң, дәһшәт, зәһәр, ләғнәт менән,
Ләғнәтеңде илатырмын мин, һөйөп шәфҡәт менән.

Мин сыҙармын - кил, туған, бажаң менән һуҡ, ор, йәнес;
Мин көлөрмөн - төрт оҙон һөңгөңдө, күкрәкте сәнес!
Ул оҙон һөңгөң осон күкрәк үбер, һөйөнөп ҡабыр;
Күҙ йәшем һөңгөңдә ҡанды ялап, ергә тамыр.

Күҙ йәшемдән ҡанлы һөңгөңдә ҡыҙыл нур ялтырар;
Ҡулдарың киң шәфҡәтем ҡаршында тетрәп ҡалтырар.
Ергә тамған күҙ йәшемдән илгә балҡыр күксәсәк;
Ул сәсәктәр күккә осҡан йәнемә йәм һирпәсәк.

Таш бәғер, кил, минән ал атҡан ташыңды аш итеп,
Выжданыңды нурлар ул — бәғереңдә йөрөт алмас итеп...
Даръя төҫлө киң, тәрән, төпһеҙ, офоҡһоҙ шәфҡәтем;
Ул юйыр барлыҡ залимдың золматын һәм вәхшәтен.

Ләза — тамуҡ, йәһәннәм.

**Салауат батыр**
*(Үҙ көйөнә)*

Салауат нисә йәшендә?
Йәшел бүрке башында...
Халык йырынан

Салауат ҡандай бәһлеүән?
Салауат ҡандай бәһлеүән?
Даусан, яусан бәһлеүән,
Еңелмәүсән бәһлеүән.
Салауат тиңһеҙ арыҫлан,
Салауат тиңһеҙ арыҫлан,
Арыҫландай алышҡан,
Уғы алған алыҫтан.
Салауат - Урал балаһы,
Салауат - йөрәк ҡәғбәһе,
Ерҙә әнүәр күҙәһе,
Күктә зәңгәр шәүләһе.
Салауат дауҙы ҡайтарған,
Салауат яуҙы айҡаған,
Ҡылысы тауҙы аҡтарған,
Тауышынан күл сайҡалған
Салауат — йәнле шәжәғәт,
Салауат мәңге сәләмәт,
Ҡаны беҙгә аманат,
Килтермәбеҙ яманат!

Ҡәғбә - тоткан юл, маҡсат.
Әнүәр - нурлы.
Шәжәғәт - батырлыҡ.

**Ҡаһарман**
**Әмир Ҡарамышев**
*(Мәрхүмдең ҡәберендә һөйләнде)*

Бөгөн беҙгә ни булған?
Күңелебеҙ ник ҡырылған?
Йөҙөбөҙҙә ник тағы
Үлгән хәсрәт терелгән?

Терелгәндең сәбәбе:
Бер аяулы ир үлгән!..
Ул аяулы кем ине?
Әмир тигән ир ине.

Башҡорт күген яҡтыртҡан
Аҙ йондоҙҙоң бере ине.
Яу өҫтөнә атылһа,
Ҡуйға сапҡан бүре ине.

Ғәскәр йыйнап, баш булып,
Яҫтағаны таш булып,
Ут эсендә ут йотоп,
Нисә көндәр ас йөрөп,

Дошман яуын ҡырғанда
Күкрәгендә сир ине...
Шул сирендин үлгәндә
Етенсе август көнө ине.

Алдыбыҙҙа ниндәй тән?
Ҡәлбебеҙҙә ниндәй ғәм?
Түбәмеҙҙә әйләнеп
Осоп йөрөгән ниндәй йән?

Алдыбыҙҙа ир тәне,
Ҡәлбебеҙҙә ил ғәме,
Алды тәҡдир арадин
Тағын да бер иркәне!..

Йәнен уның әйтәйем:
Йән түгел ул — намыҫтыр,
«Әмир» тигән бер исем
«Намыҫ» тигән тауыштыр.

Йә илаһым, Әмирҙе
Йәннәтенә ҡауыштыр!

***

Эй, Әмирйән, ил өсөн
Һүнгән шәмдең бере һин.
Ҡара гүрҙе ағартып
Ингән йәндең бере һин.

Анаң һөтөн анаңсөн
Имгән йәндең бере һин,
Бәхетле һин — үлмәнең:
Ил күңелендә тере һин!..

Сәсәкләрдин һөйөнгән,
Шишмәләрҙә ҡойонған,
Дошмандардин йән һаҡлап,
Тауға-ташҡа һыйынған.

Һин бер батыр ир инең
Илең өсөн көйөнгән...
Ятҡан ерҙән ҡалҡытҡан,
Намыҫ йөҙөн яҡтыртҡан,

Ҡая тауҙар башында
Януб торған кәндилдәй;
Ҡаһарманлыҡ аңҡытҡан,
Ғәйрәт берлән дан тотҡан,

Үрҙән ҡырға һикереп,
Оса сапҡан дөлдөлдәй,
Һин бер аҫыл ир инең
Ил бәхетенә ант иткән!..

* * *

Осто Әмир асманға,
Тағы байрам дошманға,
Тағы ҡайғы, тағы зар
Моңло Башҡортостанға.

Көйөнһәк тә беҙ бында,
Рәхәттә ос һин унда!..
Беҙҙән сәләм ирештер
Ғабдулла һәм Ғимранға!..

Сәләм һеҙгә, өс ҡорбан!
Әмир, Ғабдулла, Ғимран;
Йәнегеҙ фиҙа иттегеҙ
Башҡортостан ғишҡындан.

Өсәү бергә йөрөгөҙ,
Нур эсенә сумығыҙ!
Фәрештәләр ғәскәре
Төҙөп беҙгә килегеҙ!

Атланып аҡ пыраҡҡа,
Остогоҙ һеҙ йыраҡҡа,
Ҡалағыҙ тик йөрәктә
Мәңгелеккә үрнәккә...

* * *

Урынығыҙ түрҙән яһалһын,
Уңай булһын артығыҙ!
Мәңге рәхәт йәшәһен
Күп интеккән халҡымыҙ!

**Ҡорбан байрамы мөнәсәбәте менән**

1
«Уғлынды сал, айа Ибраһим», — тип,
Ишетеп күктән хаҡтың ауазын,
«Бисмиллаһи рахман рәхим», — тип,
Ышҡый Исмәғилдең боғаҙын.

«Ҡуй, илама, атай... Мин тыныс, шад...
Хаҡ ризаһын ал!» — ти Исмәғил.
Изге ата ышҡый... киҫмәй бысаҡ,
Гүйә, ялап тора Ябраил.

Кинәт яңғырай тауыш: «һөйәкле ҡол,
Изге Исмәғилде ҡотҡар, — ти,
Улың урынына ҡорбанлыҡ ҡыл —
Ебәрелде күктән ҡусҡар», ти.

Хоҙай хаҡы әсән ғәзиз улын
Ҡорбан ҡылмаҡ булды Ибраһим.
Оло пәйғәмбәрҙең изге күңелен
Үрнәк ҡылды беҙгә ул рәхим.

Иле өсөн башҡорт, Ибраһимдай,
Ҡорбан итә үҙен, балаһын.
Батыр балалары, Исмәғилдәй,
Иле өсөн ташлай анаһын.

Ҡыуан, башҡорт, ҡыуанып хаҡҡа буйһон,
Ил бәхетенә бағла билеңде.
Алғы көнгә ғәмле туйың өсөн
Ҡыуанып уҙҙыр барлыҡ ҡыйынды.

Ҡыуанып көт, хаҡтан һуғып сәғәт,
Биргән ҡорбан ҡабул булғанын,
Зәңгәр нурҙар һирпеп, Ябраил мәләк
Маңлайыңдан һыйпап торғанын.

**Ҡурайҡайға**

Һыҙғырт, ҡурай, үткән ҡайғыларҙы,
Өҙҙөрт, ҡурай, йөрәккәй ҡылдарын;
Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,
Һөйҙөрт, һөйләп башҡорт моңдарын,
Һөйлә һаҡмар, Яйыҡ, Ашҡаҙарҙы,
Һөйлә йәмле Урал буйҙарын;
Һөйлә ожмах кеүек сәхрәләрҙе,
Йәйелеп ятҡан йылҡы, ҡуйҙарын,
Һөйлә йәйләүҙәрҙә йәйҙе йәйләп,
Ҡырҙан ҡырға күсеп ҡуныуҙы;
Һөйлә ҡашмау кейеп, селтәр бәйләп,
Ҡырҙа йырлап йөрөгән һылыуҙы,
Һөйлә елберләгән таллыҡтарҙы
Шылтырап аҡҡан шишмә буйында;
Һөйлә күбәләктәр, бал ҡорттарҙы
Уйнап осҡан сәскә ҡуйынында.
Һөйлә тарихыңдан, яуҙарыңдан,
Һөйлә ҡанлы башҡорт болаһын;
Һөйлә олатайҙар, хәлдәренән,
Йәрәш, торош, заңын, йолаһын...
Быуын-быуын ғүмер Башҡортостан
Һуғарылды ҡара ҡан менән;
Сыҡтыҡ ҡара көстән ҡанды эскән,
Һуғарылһын инде йәм менән!
Яугир ирҙәребеҙ нисә заман
Аҡ тирмәлә ҡылыс ҡайраны;
Шалтыр-шолтор сыңлап һауыт-һайман,
Өҫтәбеҙҙә һөңгө яйнаны.
Нисә заман, бахыр ҡурайҡайым,
Ғазраилдың йырын йырланың;
Күпме ҡыйын күреп, күпме вайым,
Үкһеп-үкһеп өҙөлөп иланың.
Килде заман, инде шатлан, ҡурай,
Йәмле тауышың илгә яңраһын!
Ҡыуанып китһен урман, сәхрә, туғай,
Буҙ турғайҙар ҡыуанып һайраһын!
Уйна, ҡурай, күктән йәм шаулаһын,
Нур яйнаһын баштар өҫтөндә!

Йәм яҡтыһы юйһын ҡан шәүләһен,
Гөлдәр үҫһен таштар өҫтөндә!
Күкрәтеп, геүләп, һайрап, өзләп,
Килде, ҡурай, уйнар миҙгелең,
Яҡты уйҙар һалып, дәртен ҡуҙғап,
Күккә ашыр йөрәктәр һиҙгерен!

**Күҙеңде ас**

Күҙеңде ас, егет, бул ҡаһарман,
Зәһәр сәсеп ажғыр, ҡәһәрлән!
Күр, илеңде ялмап һәр яғынан
Дөрләп янып килә йәһәннәм.

Йәһәннәмдән ҡайнап, ташып, күпереп,
Ҡалҡып тора уттан болоттар,
Сабый бала төҫлө ярһып, үкереп,
Ерҙә илай меҫкен өмөттәр.

Ялҡын һибеп, ҡыҙыл күмер сәсеп,
Ут ямғыры яуа, бөркөлә.
Йәһәннәмдән сыҡҡан убыр ҡарсыҡ,
Ерҙе йотам, тиеп елкенә.

Болот ситтәрендә йылан-саян,
Ялҡын сәйнәп тора, аҫылынып.
Шуны күрмәҫ өсөн шәфҡәт-иман
Әллә ҡайҙа ята йәшеренеп.

Зобаниҙар һелтәп гөрзөй суҡмар,
Болоттарҙы бутай, ҡуйырта,
Ут эсенән сүпләп вәхши ҡоштар
Беҙҙең өҫкә үлем ырғыта.

Һарыла ергә ялҡын һәр офоҡтан,
Ут һурыла, донъя ҡурыла.
Өйөрмәләр яһап ҡыҙыл уттан,
Әжәл шайтандары өйөрөлә.

Саф һауаны ялҡын ашап төшә,
Ут һулайһың һауа урынына,
Йәнә ялҡын төшә, йәнә оса,
Йәнә ҡайнай, йәнә урғыла...

Мәңге һүнмәҫ, ахыры, был йәһәннәм,
Һаман яныр, һаман ҡыҙҙырыр.
Ғәзиз илен һинең, эй, ҡаһарман,
Һаман ауыр көндәр уҙҙырыр.

Һис ҡайғырма, шатлан әүәлгесә,
Бәхет еңер әле, иншалла,
Йәһәннәмдәр аша уҙмайынса,
Ожмах табырбыҙ тип ышанма!

**Көтмәҫтән**

Уйламаҫтан, көтмәҫтән,
Шәйләмәҫтән-нитмәҫтән:
Башҡортостан буйында,
Урманында, ҡырында,
Үҙәгендә, һыртында,
Ҡултығында, соҡоронда,
Тау аҫтында, өҫтөндә,
Күкрәгендә, түшендә;
Туғайлыҡта, шырлыҡта,
Ҡайынлыҡта, таллыҡта;
Һыу буйында, йылғала,
Ҡамышлыҡта, күлдәрҙә...
Бик кинәттәй, көтмәҫтән,
Бер ҙә һиҙмәҫ нитмәҫтән
Булды бик ҙур үҙгәреш,
Йәмле шатлыҡ, ҡуҙғалыш:

Ҡибла яҡтан ел иҫте,
Тулҡынланды күл өҫтө;
Бар ағастар шаулашты,
Сәләмләште, һаулашты;
Һөйөнөп торҙо үләндәр,
Йәшел бәрхәт сирәмдәр;
Гөл-сәсәктәр асылды,
Хуш еҫтәре сәселде;
Тау буйҙары алланды,
Бер илаһи йәмләнде...
Туғайлыҡтар йәшәрҙе,
Нур биҙәнде, яһанды;
Урман эсе гөрләне,
Япраҡтары йырланы;
Һыуҙар шарлап көлдөләр,
Таштар уйнап йөрөнөләр;
Урал тауы һөйөндө,
Өҫтөнә нур ҡойолдо;
Фәрештәләр төштөләр,
Урал өҫтөн ҡостолар,
Ҡыр байрамын күрҙеләр:
«Был ниндәй туй?» - тинеләр.
Яуап килде сәманан,
Ҡадир мотлаҡ алланан:
«Башҡорт халҡы терелде,
Терелеү суры өрөлдө...»
Фәрештәләр һөйөнөшөп
Йырлап киттеләр осоп:
«Башҡортостан йәшәһен!
Башҡорт күрһен сафаһын...»

**Ҡан шәүләләре**

Күп зобанизар иҫәпһеҙ ҡанлы арба тарталар,
Арбалар, уттан вә гөрзәйҙән яһалған тәртәләр.
Йөҙ һытылған, тештәр ыржайған, ҡара көйгән ирен,
Күҙ төбөндә ҡап-ҡара ҡандан ойошҡан арпалар.
Күр ана: астар ашайҙар, гүр ҡаҙып, серегән мәйет,
Һиҫкәнә йән, сирҡана тән һәм сымырлай арҡалар.
Күр ана: инсан башынан тау өйөлгән — баш тауы!
Яҡ-яғында ябырылып осмаҡта ҡоҙғон-ҡарғалар.
Ерҙә ҡан, ҡандан томан, күктә эленгән ҡанлы ҡул,
Ҡанлы ҡулда ҡан тамып торған ҡот осҡос балта бар.
Ҡан томанында йөҙә мәнфүр үлем ғифриттары,
Бары ла ҡапҡан ауыҙына шомло үләкһә-мәйтәләр.
Һәр офоҡтан урғылып, ҡайнап сыға утлы төтөн,
Борола-һарыла ажғырыл, шунан йыландар ҡалҡалар.
Ул сыйылдайҙар ҡолаҡта бихисап ен шымсыһы:
Алғы көндән ҡурҡыныс, ҙур фажиғә аңғарталар.
Күрһәтә мең төрлө төҫ, мең төрлө эш бер *лахзала*,
*Ләүхелмәхфүз*дә теҙелгән серле, тылсым карталар...

Зобани - яндырыусы, ҡан әсеүсе.
Мәнфүр — нәфрәтле.
Мәйтәләр - мәйеттәр.
*Лахза* - күҙ атыл йомғансы.
*Ләүхелмәхфүз* - дини легенда буйынса, кешенең ҡылған эштәрен яҙып бара торғпн кенәгә.

**Йән**

Аһ, йәнем, ник күктә ҡабынып, йәмгә табынып торманың?
Ник шиғырҙан таж кейеп, илһамға ялынып йөрөмәнең?

Ник күгәрсен төҫлө гөрләп, тик яһап нурҙан оя.
Торманың ник нур эсендә мәңге йырлап мәдхиә?

Ник мәләктәй йөрөмәнең, ап-аҡ ҡанат елпеп осоп?
Аңҡытып йәннәт еҫен, һирпеп шиғыр, һирпеп ғишыҡ?

Йәнкәйем, асманды ташлап, ергә индең ни өсөн?
Йәмде ташлап, ғәмгә сумдың тәнгә керҙең ни өсөн?

Уйланыңмы, ерҙә лә мин нурға ҡойонормон, тиеп?
Йәм ҡойормон, йәр һөйөрмөн һәм дә һөйөлөрмөн, тиеп?

Уйланыңмы, хөр йәшәрмен, тип бәхетһеҙ ерҙә лә?
Ник ябылдың һуң, улайһа, «тән» исемле төрмәгә?

Сыҡ, йәнем, тән зинданынан, күккә ос, йәмлән йәнә,
Ергә төшһөн ал шәфәктәй алланып шәүләң генә.

**Беҙ**

Беҙ үҙебеҙ - башҡорттар,
Күп ырыуға баш йорттар
Беҙҙә гәүһәр, беҙҙә йәүһәр,
Беҙҙә һәр бер ашлыҡтар.

Беҙҙә тиңһеҙ сәхрәләр.
Сәхрәләр — ожмах улар;
Унда гөлдәр тирбәнеп,
Йәмләнергә саҡыралар.

Унда ҡоштар һайраша,
Күлдә ҡамыш шаулаша.
Ҡамыш буйы әрүшә,
Тамаша, эй тамаша.

Беҙҙә ҡалын урмандар,
Беҙҙә данлы Урал бар;
Урал аҫты алтындыр,
Өҫтә — шәфҡәт балҡыйҙыр.

Һиҙен, башҡорт, бәхетеңде,
Төшөн, башҡорт, атыңды;
Күрер өсөн тәхетеңде,
Истиҡбалың алтынлы.

**2 Ғинуар көнө**

Бөгөнгө көн мин тыуҙым,
Иламайса, тын тыуҙым;
Истиғдадтан, зәканан, —
Һәр ҡайһынан кәм тыуҙым.

Ғүмерем үтте бикарерәк,
Буш ел ҡыуҙым да ҡыуҙым;
Тыуҙым, үҫтем, ҙур булдым,
Ник ялалдым, ник тыуҙым?

Исиғдад - эшкә яраҡлылыҡ.
Зәка - зиһен, аҡыл.

**Килтер**

Тәрилкәгә күмәсеңде өйөп килтер,
Бабич ағай, ашап бөтөр, тиеп килтер;
Килтергәндә йырлап килтер, бейеп килтер,
Шәйех ағай ашаһын, тип, һөйөп килтер.

**Яҙғы йыр**

Ултырҙым мин тауҙың күкрәгенә,
Йырҙар яҙам, елкәй, иҫмәй тор.
Шишмәкәй, тын, аҡрын... сеү, шаулама,
Үткән ғүмерем, иҫкә төшмәй тор.

Сылтырап аҡҡан шишмә буйҙарында,
Аһ, мин йөрөнөм былтыр кем менән?
Шул саҡтарҙы, шишмә, алып аҡтың,
Ҡалдым һыҡрап ауыр моң менән.

Йырҙар яҙам тауҙың күкрәгендә,
Зинһар, тимен, елкәй иҫмәй тор.
Йомол, гөлкәй, йомол бер минутҡа,
Минең күҙҙәремә төшмәй тор.

Аһ, сәскәләр, былтыр һеҙҙе өҙөп,
Кемдең күкрәгенә ҡаҙаным?
Кемгә ҡаҙап, кемгә моңло ҡарал,
Күҙҙәренән яуап араным?

Ни тине ул күҙҙәр, эй, сәскәләр,
Күрҙегеҙме серле күҙҙәрен?
Кем ине ул, тетрәп хозурында,
Аҡ ҡулдарын һорап, теҙләндем?..

Йырҙар яҙам тауҙың күкрәгендә,
Ҡөҙрәтле ел, аҡрын, иҫмәй тор,
Һандуғаскай наҙлым, ҡуй, һайрама,
Һайрап, йәш бәғеремде киҫмәй тор.

Иҫеңдәме, былбыл, үткән яҙҙа,
Һин һайраған ағас төбөндә,
Кем ине ул шунда, ҡосағымда,
Ай балҡыған яҙҙың төнөндә?

Ҡотло булһын айлы төндәр, тиеп,
һин бит беҙҙе ҡотлап һайраның,
Һин бит шунда һикереп ботаҡ һайын,
Ҡуныр өсөн урын һайланың.

Һин инең бит уның күкрәк серен,
Һайрап-һайрап, миңә белдергән,
Ул ҡайнатҡан минең күкрәк йырын,
Һайрап-һайрап, айға мендергән.

Кем ине ул шунда ай битенән
Минең йырҙарымды уҡыған?
Кем, тирбәтеп, минең күкрәгемдә
Уйнап торҙо таңда йоҡонан!..

Йырҙар яҙам тауҙың күкрәгендә,
Тау күкрәге серем белһен, тип;
Гөлдәр һирпеп яҙған йырҙарымды
Күкрәгендә һаҡлап торһон, тип.

Тыңлағыҙсы, ҡоштар, йырҙарымды,
Тыңлаһағыҙ, һеҙгә йырлармын,
Һеҙ һайраһыҙ, ә мин тыңлармын,
Тыңлап, үкһеп-үкһеп илармын.

Араным - эҙләнем.

**Большевиктар менән килешеү туралы башҡорт халҡына көйлө хитап**

1
Башҡорт халҡы, һиңә бер һүҙ әйтәм,
Минең әйткән һүҙҙе тыңлаһаң,
Зәки һеҙҙе һатҡан тигән һүҙгә
Ышанмаçһың, алйот булмаһаң...

Уйыңа ла алма, башҡорт булһаң,
Әхмәтзәки беҙҙе һатыр тип!
Ҡөрьән үбеп Зәки ғәһед иткән,
Уйлай күрмә антын тапар тип.

Башҡорттағы намыç, иман менән
Ярһып тибә Зәки йөрәге,
Ҡолаҡ асма дошман ҡотҡоһона!
Зәки — Башҡортостан терәге.

Башын һалып Зәки эшкә кергән
Йәтим Башҡортостан бәхетенә,
Валлаһи, ул һатмаç тыуған илен
Донъя аҡсаһына, тәхетенә...

Ышан, ышанғандай бер аллаңа:
Зәки һинең садыйҡ уғылың!
Утка бешер Зәки, һыуға төшөр,
Әммә һатмаç намыç - күңелен!

Большевиктар менән ул килешһә,
Илде ҡотҡарам тип килеште,
Уйлай күрмә, ниңә улай булгас,
Дутов яҡлы булып һуғышты?

Дутов яҡлы булдыҡ шуның өсөн,
Дутов беҙҙе яҡлап йөрөгәнгә,
Мин дә һеҙҙең кеүек һуғыш ҡылам
Ҡоролтайҙы яҡлап, тигәнгә.

Дутов яҡлы булдыҡ шуның өсөн,
Дутов беҙгә ҡорал биргәнгә,
Кәрәк ҡәҙәр аҙыҡ, кейем, аҡса
Тағы биреп торам, тигәнгә.

Дутов яҡлы булдыҡ шуның өсөн,
Дутов халыҡ яҡлы булғанға,
Барлыҡ ҡоролтайсы социалдар
Дутов яҡлы булып йөрөгәнгә.

Дутов яҡлы булдыҡ шуның өсөн,
Большевиктар тапап килгәнгә.

«Красный гвардия», сиктән сығып,
Аҫкан, киҫкән, ватҡан, ҡырғанға.

Ҡайһыбыҙҙы бикләп төрмәләргә,
Ҡайһыбыҙҙы нахаҡ атҡанға,
«Красный гвардия» вәхшәтенән
Башҡортостан ҡанға батҡанға.

Башҡорт намыҫына бысраҡ ташлай
Юрый ҡайбер битһеҙ, иманһыҙ.
Әйтә улар: «Дутов яҡлы булып,
Ҡара бысраҡ юлды ҡыуғанһыҙ».

Ауыҙы яман ҡотҡо һалғанлыҡтан,
Дошман булды беҙгә большевик.
Шул сәбәптән Дутов яҡлы булдыҡ
Әммә уға сындан ҡаршы инек.

Бына хәҙер донъя алмашынды,
Һәр эш түңкәрелде асылына;
Беҙ ҡушылдыҡ яҡты, хөрлөк яҡҡа,
Дутов ҡайтты ҡара нәҫеленә.

2
Беҙ ҡушылдыҡ ҡыҙыл тарафына,
Ҡыҙыл беҙҙең яҡлы булғанға,
Азат Башҡортостан йөмһүрлеген
Таныйым тип хуплап торғанға.

Беҙ ҡушылдыҡ ҡыҙыл тарафына
«Красный гвардия» бөткәнгә,
Большевиктар эште рәткә һалып,
Асыл юлдарына сыҡҡанға.

Беҙ ҡушылдыҡ хәҙер ҡыҙылдарға,
Беҙҙең өсөн лайыҡ шул булғас.
Ниңә ҡушылмайыҡ ҡыҙылдарға,
Күптән көтөп торған юл булғас?

Ниңә беҙ ҡасмайыҡ ти шул Дутовтан
Дутов юртып киткәс уң яҡтан,
Ниңә ярашмаҫҡа большевик менән,
Беҙҙең һуҡмаҡ киткәс һул яҡтан?

Большевиктар әйтә: был донъяла
Ярлы халыҡ хөкөмө йөрөһөн, тип,
Ярлы эшселәрҙең хас дошманы
Буржуйҙарҙың тамыры ҡороһон, тип.

Дутов, Колчак әйтә: эш башына
Алтын тажлы батша менһен, тип,
Батша менеп, һаман Николайҙай
Ярлыларҙың ҡанын имһен, тип.

Большевиктар әйтә: ҡоллоҡ бөтһөн,
Ярлы халыҡ рәхәт йәшәһен,
Ирек көнө тыуып был донъяға,
Тигеҙ яҡты көндәр яһаһын.

Дутов, Колчак әйтә: закондарҙы
Бай-бетсәләр яҙып торһон, ти.
Ярлы эшсе халыҡ әүәлгесә
Бай-бетсәгә хеҙмәт ҡылһын, ти.

Большевиктар әйтә: нәҫел-нәсәп,
Түрәлектең бото бер тин, ти.
«Ҡалын елкә» менән «ярылған ҡул»
Көнкүрештә булһын бер тиң, ти.

Дутов, Колчак әйтә: ергә, күккә
Хужа булһын фәҡәт урыҫ, ти,
Мосолмандар һаман иҙелһендәр,
Урыҫтыҡы ғына дөрөҫ, ти.

Большевиктар әйтә: һәр бер илгә
Камил мөхтәриәт бирелһен!
Һәр бер ярлы, мазлум, иҙелгән ил
Мөхтәриәт алһын, терелһен!

Дутов, Колчак әйтә: ваҡ милләттәр
Мөхтәриәт ала күрмәһен!
Батша ҡулы аҫтында ғүмер һөрөп,
Буржуаздар йырын йырлаһын!

Уйлап ҡара, башҡорт, аҡылың менән,
Ҡайһы тараф һиңә хәйерле?
Анау төрө яман Дутовтармы?
Әллә большевиктар хәйерле?

Бер ҙә шикһеҙ һиңә аҡылың әйтер:
Большевиктар юлы хәйер, тип,
Йәнең теләр шунда: эй, хоҙайым,
Дутовтарҙан мәңге айыр, тип.

Ни әйтерһең икән инде миңә
Әхмәтзәки һине һатҡанмы?
Әллә яман юлдан алып сығып,
Яңы, яҡты юлды тапҡанмы?

Һин әйтерһең миңә: динең булһа, —
Юҡ, һатмаған икән, — тиерһең,
Башҡортлоҡтоң изге, ҙур намыҫын,
Юҡ, аҡлаған икән, — тиерһең.

3
Бер беҙ генә түгел, бик күптәрҙе
Ышандырҙы Дутов бер саҡта,
Себер яҡтан залим Колчак сыҡҡас,
Ҡушылды ла китте Колчакка.

Дутов төҫөн асҡас, халыҡ яуы
Большевикка барып ҡушылды.
Дутов, Колчактарҙың юлын күреп,
Чехословактар ҙа бошондо.

Ҡаныбыҙҙы бикәр ҡоймайбыҙ, тип,
Чехословак һуғыш ташланы.
Батша ултыртырға килмәнек, тип,
Өйҙәренә ҡайта башланы.

Колчак сыҡҡас, Дутов серен асҡас,
Барлыҡ социалист-партия
Изге ихтилалдың хөрмәтенә
Тағылдылар ҡыҙыл артына.

Шулай итеп, Дутов, Колчактарҙан
Халыҡ күңеле һаман һыуынды.
Был икәүгә ҡаршы һуғыш өсөн
Ҡыҙылдарға барып һыйынды.

Ике залим, ситтән ярҙам һорап,
Союзникка атты күҙҙәрен.
Союзниктар: «һеҙгә ғәскәр юҡ», тип
Аңлаттылар һуңғы һүҙҙәрен.

Шул сәбәптән хәҙер Дутов, Колчак,
Белмәйем инде, ни хәл итерҙәр.
Ни хәл итһен инде: мәғлүм хәлдәр —
Тиҙҙән йәһәннәмгә китерҙәр.

4
Башҡорт халҡы элек, аңламаҫтан,
Ғәкес инҡилапсы, тинеләр.
Батша ултыртыуға теләй торған
Ҡара көстәр яҡлы, тинеләр.

Белһен улар беҙҙең, башҡорттарҙың,
Ғәкес инҡилапсы түгелен.
Уҡыһындар башҡорт тарихтарын,
Шунда күрер башҡорт күңелен!

Шунда күрер: башҡорт бородан уҡ
Инҡилапсы булып килгәнен,
Залим түрәләргә башын бирмәй,
Ирек өсөн һуғыш ҡылғанын.

Белеп торһон: беҙҙәр борондан уҡ
Ҡара көскә яман ҡаршы инек,
Беҙҙең үткәндәге ҡаһармандар
Заманына күрә большевик!

Беҙҙең Абыҙ, Аҡай, Салауаттар,
Ҡараһаҡал, Айҙар, Күсемдәр —
Былар бары ла ҡара көскә ҡаршы
Һуғышып үлгән алтын исемдәр!

Ирек өсөн, азат илкәй өсөн
Борондан уҡ килдек ҡырылып.
Урыҫ менән нисә, нисә йылдар
Һуғышып барып көскә биреллдек.

Урыҫ ҡыҫҡас беҙҙе шытырлатып,
Мәлиәттән сыҡтыҡ, иҙелдек.

Ер тарайҙы беҙҙең, ил ҡарайҙы,
Әҙәм күрмәгәнде беҙ күрҙек.

Инде бынау форсат ваҡыт килгәс,
Башҡорт халҡы йоҡлап ятһынмы?
Иле өсөн һуғышып шәһит булған
Олатайҙар исемен һатһынмы?

Юҡ, һатманы башҡорт иҫке исемен,
Атылып килеп сыҡты майҙанға!
«Мин — башҡорт!» — тип шунда һөрәнләгәс,
Мәғрур халыҡ ҡалды хайранға.

Уйлай ине улар башҡорт халҡын
Үлем иҫереклеге тотҡан тип,
Йәмле ерен уның урыҫ баҫҡан,
Башҡортлоғон татар йотҡан тип.

Бушҡа сыҡты барлыҡ яуыз фекер,
Башҡорт халҡы үҙен танытты.
«Азат Башҡортостан» тыуын алып
Ҡара көскә ҡаршы ҡалыҡты.

Ирек ҡоло башҡорт, шулай булғас,
Дутов, Колчак яҡлы булырмы?
Аяҡ-ҡулын бәйләп, үҙен-үҙе
Ҡара көскә тотоп бирерме?

Мәңге бирмәҫ башҡорт һәм бирҙермәҫ
Иле өсөн янған һағышы!
Үлһә үлер ғәзиз ере өсөн,
Әммә тере ҡалыр намыҫы!

5
Уҙаманым, ҡустым, аҡһаҡалым,
Олатайым, апам, инәйем,
«Ышанмағыҙ дошман һүҙенә!» - тип
Ҡайта-ҡайта йырлап көйләйем!

Дутов залимдарҙың ялсылары
Һеҙҙең арағыҙҙа йөрөрҙәр,
Һеҙҙе алдап ауға төшөрөргә
Төрлө ҡиәфәткә керерҙәр!

Улар ҡара шайтан булһалар ҙа,
Йөрөр тыштан яҡшы күренеп,
Һеҙҙе ҡыҙғанғандай һүҙҙәр һөйләп,
Фәрештәләр һымаҡ ҡыланып.

Ҡолаҡ асма, башҡорт, ҡурҡытыуға,
Намаҙ-ниязыңды ҡыла тор.
Иҫәнлеген теләп ирҙәреңдең,
Эштең ахырын көтөп тора тор.

Фетнә һалып йөрөгән шайтандарҙы
Хөкүмәткә тотоп килтерең,
Ҡулға төшкән Дутов ялсыларын
Эһ тиҙермәй эшен бөтөрөң!

Башҡорт халҡы! Һиңә һүҙем ошо,
Баштан-аяҡ ихлас тыңлаһаң,
Зәки һине һатҡан тигән һүҙгә
Ышанмаçһың, алйот булмаһаң.

Йырсығыҙ Шәйехзада
1919 йыл, 25 февраль. Темәс.
"Темәс башҡорт шуралар йөмһүриәтенең матбуғаты".

Ғәһед - ант.
Садыйҡ - тоғро.
Йөмһүрлек - республикалылыҡ.
Мөхтәриәт - ирек, азатлыҡ.
Ихтилал - сыуалыш.
Ғәкес инҡилапсы - революцияға ҡаршы.
Мәлиәттән сыҡтыҡ - эштән сыҡтыҡ